✓*Гәзиткә яҙылырға онотҡандарға еткерегеҙ: 15 августҡа саҡлы яҙылһалар, гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башлаясаҡтар. Был мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырһалар, йыл аҙағына тиклем "Киске Өфө"һөҙ йәшәйәсәктәр. Хаҡтар: 50665 индекслы "Киске Өфө" дүрт айға 212 һум 16 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 236 һум 16 тин. Шулай уҡ бөгөндән гәзитебеҙгә 2011 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә яҙыла башларға мөмкин.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24 - 30 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №30 (396)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Йәшәгең килһә...**

үлгәнсе эшлә!



6

**Милләтебеҙ холҡонда...**

математика фәненә хас һыҙаттар ята



8-9

**Йәштәр тоҡандырған йондоҙ...**

йәштәр күңеленә ҡуҙ һалһын



11

**Ҡул ҡаушырып ултырып,**

уңыш ҡошонда осороп ебәрмә...



12-13

14 ТВ-программа


АҘНА ШАҢДАУЫ

# ЯҢЫ ПРЕЗИДЕНТ МЕНӘН, ЙӘМӘҒӘТ!

## Тәүҙә - рәсми хроника



• 2010 йылдың 15 июлендә Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведев Сочиҙа үҙенең "Бочаров ручей" резиденцияһында Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимовты ҡабул итте. Осрашыуҙа Рәсәй Президенты Башҡортостан Республикаһы Президентының отставкаһын ҡабул итте.

• Шул уҡ көндә Рәсәй Федерацияһы Президентының "Башҡортостан Республикаһы Президенты вәкәләттәрен ваҡытынан алда туҡтатыу тураһында"ғы Указына ярашлы, Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп Рөстәм Зәки улы Хәмитов тәғәйенләнде. Рөстәм Хәмитов үҙ вазифаһын үтәүгә тотондо.

• 16 июлдә "Берҙәм Рәсәй" партияһы Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев ҡарамағына Башҡортостан Республикаһы президенты вазифаһына Федерация Советы ағзаһы Рудик Исҡужин, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Рөстәм Мәрҙәнов, "РусГидро" асыҡ акционерҙар йәмғиәте идараһы рәйесе урынбаçары, Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Рөстәм Хәмитов кандидатураларын индерҙе.

• 17 июлдә Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведев Рөстәм Хәмитовҡа республика Президенты вәкәләттәрен йөкмәтеү өсөн уның кандидатураһын Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҡарауына индерҙе. "Берҙәм Рәсәй" партияһы тәҡдим иткән дүрт кандидатуранан дәүләт башлығы Рөстәм Хәмитовты һайланы.

• 19 июлдә Башҡортостан Республикаһының дүртенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ултырышында депутаттар Рөстәм Хәмитовҡа Башҡортостан Республикаһы Президенты вәкәләттәрен йөкмәтте. Башҡортостан парламентының ултырышта ҡатнашҡан 105 депутаты ла уның кандидатураһы өсөн берҙәм тауыш бирҙе. Шунда уҡ Рөстәм Хәмитов республиканың дәүләт телдәрендә ант итте.

• Шул уҡ көндә БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың сираттан тыш ултырышында Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһы Президенты сифатында беренсе Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, Башҡортостан Республикаһының беренсе Президенты Мортаза Рәхимовҡа республиканың иң юғары наградаларының береһе - БР Почет Грамотаһы тапшырылды. Был награда Мортаза Рәхимовҡа дәүләт ҡоролошондағы, төбәктең социаль-иҡтисади үсешендәге юғары ҡаҙаныштары, республика халыҡтары араһында дуҫлыҡты нығытыуға ҙур өлөш индергәне өсөн бирелде.

**(Дауамы 2-3 -сө биттәрҙә).**

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# КЕЙЕҘҘӘРҘӘ...

## миллилек төҫтәре

**Башҡорт халҡының үҙенә генә хас ғәжәп үҙенсәлекле кәсеп-шөғөлдәре бар. Кейеҙ баҫыу шөғөлөндә, мәсәлән, халҡыбыҙҙың миллилеге, рухиәте сағыла. Үҙ эшенең оҫталары кейеҙҙәрҙә күҙ нурҙарын, күңел торошон ғына түгел, ырыу тамғаларын, атрибуттарын, милли орнаменттарыбыҙҙы мәңгеләштерә. Ошондай оҫталар бөгөн дә һәр ауылда бар. Нәҡ ошо оҫталарҙың эш алымын киләсәк быуынға еткереү, йәштәрҙе милли рухта тәрбиәләүҙе күҙ уңында тотоп ойошторолдо ла инде күптән түгел Бөрйән районында кейеҙ баҫыу буйынса "Тамға" республика семинар-практикумы.**



Күҙәмбәттәге "Ағиҙел" тәрбиәүи-һауыҡтырыу лагеры базаһында ойошторолған был сараға ҡайҙан һәм кемдәр генә килмәгәйне. Палаткалары алдында мәж килгән Стәрлетамаҡ ҡалаһы оҫталары менән танышабыҙ. Оләсәһе Мөхәмәтйәрова Гәүһәр Тимерғәле ҡыҙынан күскән кейеҙ баҫыу маһирлығын башҡаларға өйрәтеүсе Гүзәл Мөхәмәтйәрова Өфө дәүләт иҡтисад-сервис академияһы студенттары менән килгән. "Беҙ дүрт кеше килдек, - ти Гүзәл Тимербәк ҡыҙы. - Һәр беребеҙ үҙ эшен тәҡдим итә. Нигеҙҙә, Башҡортостан тәбиғәтен, Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең рухын сағылдырыусы эскиздарҙы тәҡдим итәбеҙ. Эш башлар алдынан башҡорт халҡының әкиәттәрен, эпостарын, легендаларын өйрәнеп сыҡтыҡ. Эшебеҙҙә башҡорт орнаменттарын, эпос геройҙарын, символ композицияларын файҙаланабыҙ ".

**(Дауамы 5-се битә).**

*✔ Штәнде ауылы - ҡыр-танып ырыуы башҡорттары төбәге тип раҫлай ул. 1920 йылғы халыҡ иҫәбен алғанға тиклем унда тик бер милләт вәкилдәре - башҡорттар ғына йәшәгән.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ВОДИТЕЛГӘ - ЯҢЫ ҠАҒИҘӘ

**Хәҙер юл ҡағиҙәһен боҙоусы суд ҡарарынан һуң өс көн эсендә водитель танытмаһын тапшырырға бурыслы.** Быға тиклем күптәр танытмаһын юғалтыуға һылтанып, ваҡытты һуҙа ине. Хәҙер иһә былай хәйләләшеү барып сыҡмаясаҡ: машина йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм итеү датаһы документығыҙҙы ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренә тапшырған көндән иҫәпләнә башлаясаҡ. Тимәк, әгәр ҙә һеҙҙе 1 ғинуарҙан 4 айға машина йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм итһәләр, ә һеҙ таныҡлығығыҙҙы 20 ғинуарҙа ғына тапшырһағыҙ, уны ҡабат 1 майҙа түгел, ә 21 май көнө кире алыу хоҡуғына эйә буласаҡһығыҙ. Бәлки, танытмағыҙ ысынлап юғалғандыр? Ул осраҡта милицияға ғариза яҙыу кәрәк. Һәм водитель танытмаһын тартып алыу осоро уны юғалтыу хаҡында биргән ғаризала теркәлгән датанан һанала башлаясаҡ.

## РИШҮӘТСЕГӘ - ХУРЛЫҠ ТАМҒАҺЫ

**РФ Дәүләт Думаһының ҡайһы бер депутаттары коррупцияға ҡаршы көрәш кимәле менән риза түгелме, әллә улар был теманан һайлау алды пиары эшләргә уйлаймы?** Ни тиһәң дә, ЛДПР фракцияһы лидеры Игорь Лебедев һәм депутат Сергей Ивановтың Рәсәй коррупционерҙарын тамғалау хаҡындағы яңы инициативаһына бөтән төрлө аңлатма биреүе ауыр. Ә бит был буш хәбәр түгел. Эшләп килгән закондар буйынса ришүәт алыуҙа йә ришүәт биреүҙә ғәйепләнеүселәрҙән күпмелер ваҡыт үткәндән һуң ғәйеп алына. Тимәк, улар ришүәтселек итеүен дауам итә ала, тип иҫәпләй ЛДПР һәм үҙенсәлекле тәҡдим индерә: ришүәт өсөн хөкөм ителгән граждандарҙың һул яҡ ҡулы һыртына 3х4 сантиметр ҙурлығындағы "К" хәрефе формаһында махсус тамға һуғырға. Ошондай тәҡдим дә индерелгән закон проекты РФ Хөкүмәте һәм РФ Юғары суды ҡарамағына бирелгән, улар ҡарағандан һуң ул Дәүләт Думаһы тарафынан тикшереләсәк.

## КИОСКЫЛА ТӘМӘКЕ ҺАТЫЛМАҺЫН

**2011 йылда рәсәйлеләргә сигарет артынан алыҫыраҡ йүгерергә тура килмәгәйе әле.** Билдәле булыуынса, Дәүләт Думаһында киоскыларҙа һәм бәләкәй павильондарҙа тәмәке һатыуҙы тыйыу хаҡындағы закон проекты ҡараласаҡ. Был проектты көҙ еткәс раҫларға уйлайҙар.

Был 18 йәше тулмаған үҫмерҙәргә тәмәке һатыуҙы тыйыу маҡсатынан сығып эшләнә. Эре супермаркеттарҙан айырмалы, ваҡ киоскыларҙа тәмәке менән һатыу итеү ҡағиҙәләре тулыһынса үтәлеп етмәй. Шунлыҡтан, тәмәке менән һатыу итеү майҙаны 50 кв.метр һәм кассанан кәмендә 10 метр алыҫлыҡта урынлаштыра алырлыҡ магазинға ғына рөхсәт ителәсәк. Был шарттарҙы хатта күп кенә уртаса сауҙа селтәрҙәре лә үтәй алмаясағы билдәле.

Баҙар белгестәре иҫәпләүенсә, яңылыҡ эре магазин селтәрҙәре өсөн ҡулайлы буласаҡ. Әйткәндәй, киоскыларҙа тәмәке һатыуҙы тыйыу хаҡындағы закон тәү тапҡыр ғына ҡаралмай. 2009 йылда Дәүләт Думаһының Һаулыҡ һаҡлау буйынса комитеты ошоға оҡшаш закон проекты менән сығыш яһағайны инде, әммә ул ваҡытта уны ҡарауҙан алып ташлағайнылар.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА әҙерләне.**

АҘНА ШАҢДАУЫ

# ЯҢЫ ПРЕЗИДЕНТ МЕНӘН, ЙӘМӘҒӘТ!

## Үҙәктәгеләрҙең, Башҡортостанда етәксе алышыныуы тыныс үтмәҫ, тип ҡурҡыуы урынһыҙ булды

**Яңы президентҡа эйә булдыҡ бит әле. Нисектер, тиҙ генә килеп сыҡты был хәл. Йән-фарман, тиһәк тә булалыр. Миҫал өсөн, хирург ябай ғына операция һаналған һуҡыр эсәкте алып ташлауға оҙағыраҡ әҙерләнә. Тейешле анализдар алына, ауырыу ентекләп күҙәтелә, теге йәки был дарыуға аллергия булып ҡуймаһын, тип тикшерелә. Сирле кешенең яҡындарынан расписка яҙҙыралар, йәнәһе, бер-бер хәл була ҡалһа… Хәйер, һүҙ бит һуҡыр эсәк тураһында түгел. Рәсәй Федерацияһының иң ҡеүәтле төбәктәренән һаналған Башҡортостан Республикаһы менән идара итә алырлыҡ кешене табып, һөйләшеп, ризалығын алып, өгөт-нәсихәт биреп тәғәйенләү күп кенә ваҡыт талап итә. Бынан тыш, был эште закондарға формаль кимәлдә булһа ла тап килтереү фарыз бит. Хәйер, Федераль үҙәктең төбәк етәкселәрен алмаштырыу буйынса ярайһы уҡ тос тәжрибә туплағаны Башҡортостан миҫалында ап-асыҡ күренде. 14 июль көнө Мортаза Рәхимов үҙ теләге менән вазифаһынан баш тартҡайны. 19 июль көнө иһә республиканың Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы Рөстәм Зәки улы Хәмитовҡа Башҡортостан Президенты вәкәләттәрен тапшырҙы.**

**(Башы 1-се биттә).**

Биш көн генә. Ни бары биш тәүлек. 120 сәғәт, йәғни. Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев "Берҙәм Рәсәй" партияһы етәкселегенән Башҡортостан менән идара итерлек шәхестәрҙең исемлеген алғас, оҙаҡҡа һуҙмай ғына, шәмбе тип ҡарап тормай, шунда уҡ Рөстәм Хәмитовтың кандидатураһын Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттарына тәҡдим итте. Беҙҙең өсөн алһыҙ-ялһыҙ эшләргә әҙер Дмитрий Анатольевич Медведев өсөн ғорурланып ҡуйылды хатта. Шәмбе көндө бар халыҡ шау-гөр килеп ял иткәндә, Рәсәй Президенты беҙҙе, Башҡортостан халҡын ҡайғыртып, былар етәксеһеҙ аптырап ултырмаһын, типтер инде, тиҙләтеп, төн йоҡоларын йоҡламай, кандидатураларҙы байҡап та сыҡҡан, һайлап та ҡуйған.

Шулай итеп, беҙ, йәмәғәт, ғәҙәттәгесә, барыһынан да алда барабыҙ. Хатта президенттарҙы алыштырыуҙа ла. Әйтәйек, Карелия президенты Сергей Катанандов үҙ теләге менән вазифаһынан 30 июндә үк киткәйне. Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев Карелияның яңы етәксеһенең кандидатураһын 19 июлдә генә тәҡдим итте. Йәғни, уға уйланырға һәм ҡарар ҡабул итергә ваҡыт булған. Карелияның яңы президенты республиканың Закондар сығарыу Йыйылышы депутаттары тарафынан 21 июлдә генә раҫланды. Ниндәй һығымталарға киләбеҙ инде? Әллә Мортаза Ғөбәйҙулла улы ғаризаһын мәлһеҙерәк яҙғанмы? Ҡапыл ғына? Ә? Әллә Башҡортостан менән идара итерлек кеше, йәғни, әлеге Президентыбыҙ Рөстәм Зәки улы Хәмитов алдан уҡ дилбегәне үҙ ҡулына алырға әҙер торған. Шулайҙыр ул. Ни тиһәң дә, уның өсөн Башҡортостан ете-ят ер, сит төбәк түгел. Аллаға шөкөр, яңы Президентыбыҙ ҙа үҙебеҙҙеке.

Шулай итеп, таныш булайыҡ, Рөстәм Зәки улы Хәмитов, Башҡортостан Республикаһы Президенты. Хуш килдегеҙ, тиҙәр беҙҙә бындай саҡта!

Президентыбыҙ ғәфү итер, тим, уның тормош юлын рәсми мәғлүмәттәргә таянып, төрлө сигенеүҙәр менән байытып биргәнгә. Был уны кеше булараҡ яҡындыраҡ белергә ярҙам итергә тейеш, тигән фекерҙәмен.

Рөстәм Зәки улы Кемерово өлкәһе Ленинск-Кузнецкий районындағы Драченино ауылында тыуһа ла, атаһы Зәки Сәлим улы яғынан тамырҙары менән Балтас районының Штәнде ауылына барып тоташа. Билдәле тарихсыбыҙ Әнүәр ағай Әсфәндийәровтың хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итәйек. Штәнде ауылы - ҡыр-танып ырыуы башҡорттары төбәге тип раҫлай ул. Ауыл атамаһы Штәнде исемле йылғанан алынған. Тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, ауыл XVIII быуат аҙағында барлыҡҡа килгән һәм 1920 йылғы халыҡ иҫәбен алғанға тиклем унда тик бер милләт вәкилдәре - башҡорттар ғына йәшәгән.

2007 йылда республика гәзиттәренең береһендә Башҡортостан менән Рәсәй берҙәмлегенең 450 йыллығы уңайы менән ситтә йәшәгән күренекле яҡташтарыбыҙ менән ойошторолған әңгәмәләрҙең береһендә Рөстәм Хәмитов үҙенең тамырҙары менән яҡындыраҡ таныштыра. Себерҙә тыуһам да, атайым Башҡортостандан, Балтас районынан, ти ул. Атайымдың атаһы, ҡартатайым, Аҫҡын районының Шишмә ауылы башҡорто (был ауылды Иҫке Сарс, хәҙерге Солтанбәк ауылынан сыҡҡан башҡорттар нигеҙләгән. - **Авт.**). Ә ҡартәсәйем (йәғни, атаһының әсәһе) Әйүп исемле башҡорттоң ҡыҙы. Әсәйем яғынан ҡартатайым - Нижегород мишәрҙәренән, ә оләсәйем - себер татары, ти Рөстәм Зәки улы.

Президентыбыҙҙың теленә килгәндә инде, ул белем алған осорҙа баш ҡалабыҙҙа башҡорт мәктәптәренең булмауы 19 июль көндө БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай бинаһында булған инаугурация ваҡытында бер ни тиклем һиҙелде. Саҡ ҡына. Әммә һиҙелде. Дөрөҫөн генә әйтергә кәрәк, был хәл аралашыу етмәүҙән киләлер. Кеше ситтә, башҡа милләт кешеләре менән аралашып, бер ни тиклем ваҡыт йәшәһә, теле үҙгәрә, ҡайһы бер һүҙҙәр онотола, ҡайһы бер өндәрҙе әйтеү ауырлаша бит ул.

Рөстәм Зәки улы менән танышыуҙы дауам итәйек. Уға дүрт йәш булғанда Хәмитовтар Кемерово өлкәһенән Башҡортостанға ҡайта. Рөстәм Зәки улы Өфөләге 115-се гимназияны уңышлы (аттестатта бер генә "дүрт"ле - инглиз теленән) тамамлағас, атаһының (Зәки Сәлим улы - билдәле ғалим, техник фәндәр кандидаты, Башҡортостан дәүләт ауыл хужалығы институты доцен-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов ҡушыуы буйынса Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте 2010 йылда стационарҙа дауаланғандан һуң эшләп йөрөүсе граждандарҙың республика шифахана-курорт учреждениеларында дауаланыуы өсөн 73,6 млн һум аҡса бүлеү хаҡында бойороҡ ҡабул итте.

✔ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов "Башҡортостан Республикаһының яңы Хөкүмәтен ойошторғанға тиклем Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең үҙ вазифаларын үтәүҙе дауам итеүе тураһында" Указға ҡул ҡуйҙы. Указға Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең үҙ вәкәләттәрен ҡалдырыуға бәйле Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының 93-сө статьяһына ярашлы ҡул ҡуйылды.

✔ БР Президенты баш ҡаланың "Аҡбуҙат" ипподромында булды һәм БР буйынса Эске эштәр министрлығы патруль-пост хеҙмәте милиционерҙары-кавалеристары менән кинологтар хеҙмәтенең зона үҙәге хеҙмәткәрҙәренең күрһәтмә сығыштарын ҡараны. Ипподромдан һуң Президент БР буйынса Эске эштәр министрлығының Медицина-санитария часы госпиталендә булды. Бында госпиталь комплексының яңы төҙөләсәк диагностика корпусы нигеҙенә символик капсула һалынды.

✔ БР Президенты Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән, Ейәнсура, Йылайыр, Учалы, Хәйбулла райондарында һәм Сибай ҡалаһында ҡорологҡ эҙемтәләрен еңеп сығыу буйынса оператив төркөм ойоштороу хаҡындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, Сибай ҡалаһында урынлашҡан оператив төркөм тиҙ арала ҡорологҡ эҙемтәләрен еңеү буйынса саралар планы эшләргә һәм раҫлауға тәҡдим итергә тейеш.

✔ Башҡортостан район һәм ҡала хакимиәттәре, шулай уҡ "Рәсәй почтаһы"ның Башҡортосан идаралығы почтамттары араһында "Гәзит-журналдарға яҙылыу-2010 йыл лидеры кубогы"на ярышҡа йомғаҡ яһалды. Ярыш һөҙөмтәһендә ҡала округтары араһында 70 мең кеше йәшәгән һәм һәр мең кешегә 45 баҫма тура килгән Күмертау еңеүсе тип танылды. Райондар араһында - һәр мең кешегә 248 баҫма тура килгән Бөрйән районы, почтамттар араһында Борай алға сыҡты.

***✓ Сеймал иҡтисады - беҙҙең юл түгел. Машина һәм приборҙар эшләү, двигателдәр һәм ҡатмарлы ҡорамалдар етештереү беҙҙең ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙҙың үҙәгендә булырға тейеш.***



ты, БАССР-ҙың атҡаҙанған инженеры) тәҡдиме менән Бауман исемендәге Мәскәү юғары техник училищеһына юллана. Был Рәсәйҙә генә түгел, бар донъяла киң билдәле уҡыу йорто. Уның тарихы Екатерина Икенсегә барып тоташа.

Һуңынан Рөстәм Хәмитов ҡабаттан Өфөгә ҡайта. Бында моторҙар эшләү берекмәһендә, Өфө авиация институтында эшләй. 1990 йылда Башҡорт АССР-ы депутаты булып һайлана. Уның ҡайһы округтан күрһәтелеүен, оппоненттары кем булыуын, ниндәй лозунгылар, саҡырыуҙар менән һайлаусылар алдына сыҡҡанын әлегә асыҡлап булманы. Ә бит был Президенттың оло сәйәсәткә аяҡ баҫҡан, тәүге аҙымдар яһаған мәле. Өҫтә әйтеп үтелгән интервьюһында Хәмитов был осорҙо ошолайыраҡ баһалай: "Һайлауҙарҙы ауыр көрәш һөҙөмтәһендә, рәсми структураларҙың ҡаршылығын үтеп, хаҡлы рәүештә еңеп сыҡтым. Депутаттар мине экология буйынса комиссия рәйесе итеп һайланы. Шунда уҡ эш баҫты - Өфө һыуының фенол менән бысраныуы, диоксиндар, Ағиҙелдең үрендә һәм урта төшөндәге ҡот осҡос ташҡын, Башҡортостан атом станцияһы, Йомағужа һыу һаҡлағысы. Бынан тыш, мин Федераль үҙәк менән вәкәләттәрҙе бүлешеү тураһындағы килешеү төҙөү буйынса республика делегацияһы составында булдым. Юғары Советтың ялҡынлы сессиялары, суверенитет тураһында бәхәстәр, фекер алышыуҙар, республиканың яңы Конституцияһы - был ваҡиғалар, әлбиттә, мине сыныҡтырҙы, сәйәси тәжрибә тупларға ярҙам итте".

1993 йылда Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһының тирә-яҡ мөхитте һаҡлау, тәбиғәттән файҙаланыу, ғәҙәттән тыш хәлдәр эҙемтәләрен иҫкәртеү һәм бөтөрөү буйынса министр вазифаһын биләй. Һәм бөгөнгө көнгә тиклем республикала һәм федераль үҙәктә төрлө урындарҙа, төрлө вазифаларҙа эшләп, төрлө постарҙы биләп өлгөрә.

2009 йылдың июленән 2010 йылдың 19 июленә, йәғни Башҡортостан Республикаһы Президенты вәкәләттәренә эйә булғанға тиклем "РусГидро" асыҡ акционерҙар йәмғиәте идараһы ағзаһы.

Өйләнгән, ике балаһы бар. Техник фәндәр докторы.

Бына ошондай етәксегә эйә булды Башҡортостан халҡы яңы Рәсәй шарттарында егерме йыл йәшәгәндән һуң. Белемле, уҡымышлы, тәжрибәле. Һәр хәлдә, биографияһынан шулай тойола. Ир ҡорона еткән. Иллелә ил ағаһы, тиҙәрме әле беҙҙә? Унан йәшерәктәр ҙә бар сәйәсмәндәр араһында, өлкәнерәктәр ҙә бихисап. Путиндан саҡ ҡына йәш, Медведевтан олораҡ. Иң мөһиме, үҙебеҙҙеке. Шундайыраҡ талап менән сығыш яһағайныҡ бит Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында. Алдыҡ. Булды. Хәҙер яҡындағы көмендә биш, ә уҙа китһә, ун йыл Рөстәм Зәки улы Хәмитов менән йәшәргә һәм бергәләп эшләргә тура киләсәк. Өйрәнәйек.

Уның уҙған йылдар эсендә туплаған тәжрибәһен, Мәскәүҙәге бәйләнештәрен республикабыҙ мәнфәғәттәренә әүҙем файҙаланыуын өмөт итеп ҡалайыҡ. Әйтәйек, "Бауманка"ла белем алған кеше булараҡ, республикаға милли кадрҙар әҙерләү өсөн был уҡыу йорто менән бәйләнешкә инеп, килешеү төҙөп, Башҡортостандан йыл һайын бер нисә кешене маҡсатлы йүнәлтмә менән уҡыта башлаһа, бер ҙә насар булмаҫ ине. Рөстәм Хәмитовтың һалым системаһы өлкәһендәге бәйләнештәре, уға, моғайын, республика ҡаҙнаһын тулыландырыуҙың яңы юлдарын һәм ысулдарын табырға булышлыҡ итер. Һыу ресурстары өлкәһендәге тәжрибәһе иһә Башҡортостанда һуңғы йылдарҙа әүҙем төҙөлгән һыу һаҡлағыстар селтәрен тағы ла үҫтерергә, киңерәк йәйелдерергә ярҙам итер, тип ышанайыҡ.

Йәмғәтселек нисек ҡабул итте һуң яңы Президентты? Үҙегеҙ һиҙмәйһегеҙме һуң? Тыныс ҡына. Дөрөҫөрәге, шым ғына. Урам буйлап ҡыуанышып йөрөүселәр ҙә күренмәне. Бойоғошоп илап ултырыусыларҙы ла абайламаным. Күпселектең фекере уртаҡ: нисектер, ҡапыл ғына килеп сыҡты был хәл. Күҙ асып йомғансы. Нишләп улай ҡабаланалар икән, тигән һорау был көндәрҙә күптәрҙең ауыҙынан яңғыраны. Башҡортостан халҡы үҙ төбәгенең яҙмышына бер ҙә битараф түгел дә баһа. Беҙ бит һарыҡ түгел, тимәк. Уларға ғына көтөүсе кем булһа ла барыбер. Үлән һутлыраҡ булһын да, шишмә яҡыныраҡ булһын. Тимәк, Мәскәү беҙҙе кешегә һанамай булып сығамы? Юҡ, йәмәғәт, эш унда түгел. Киреһенсә, Федераль үҙәк урындағы халыҡтың сығыштарынан, ҡаңғырыуынан, тауыш күтәреүенән, хатта баш күтәреүенән ҡурҡты, ахырыһы. Улай ғына ла түгел, үтә ныҡ ҡурҡты. Шуға ла тап ошо осорға тап килтерелеп, бында махсус антитеррористик уҡыуҙар үткәрелде. Башҡортостан - тып-тыныс төбәк тә баһа, ниңә ҡурҡырға, тиерһегеҙ. Дөрөҫ. Башҡортостанда - тыныс, тигән һүҙҙәр рәсми лозунг ҡына түгел. Был - тормош. Быны беҙ, ғүмер баҡый ошонда йәшәгән башҡорт, татар, урыҫ, мари, сыуаш, йәһүд, башҡа бик күп халыҡ вәкилдәре, яҡшы беләбеҙ. Ә Мәскәү... белмәй булып сығамы? Тимәк, белмәй. Мәҫәлән, ошо көндәрҙә Мәскәү журналистары Башҡортостан тураһында күп нәмәне белмәй икәнлеге асыҡланды. Беҙҙең республикала ниндәйҙер яңы "Сибай районы" уйлап сығарыуҙары ғына ни тора!

Рәсми Мәскәү, һис шикһеҙ, даими рәүештә урындарҙағы хәлдәр тураһында мәғлүмәт алып тора. Ул төбәктәрҙең рәсми органдарынан булыуы мөмкин. Шулай уҡ урындарҙағы эске эштәр органдары, именлек хеҙмәттәре һәр береһе үҙ йүнәлешендә тулы һәм, иң мөһиме, дөрөҫ мәғлүмәт биреп торорға бурыслы. Был бит иҡтисадҡа, ҡаҙна тулыландырыуға, сәнәғәттең үҫешенә генә бәйле мәсьәләләр түгел. Иң мөһиме, йәмғиәттең хәле, уның торошо, тыныслығы. Бынан тыш, Үҙәк власть мәғлүмәтте рәсми булмаған сығанаҡтарҙан да алыу мөмкинлегенә эйә. Был, мәҫәлән, төрлө кимәлдәге оппозиция вәкилдәре, урындағы власть тарафынан йәберләүгә дусар ителгән, йәки шулайтып һанаған кешеләр булыуы мөмкин. Башҡортостан, уның тарихы һәм бөгөнгө көнө, халҡы һәм етәксеһе тураһында һуңғы биш-ете йыл Рәсәй халҡын Интернет аша бер нисә сайт "таныштырып" торҙо. Ошо сайттар аша үҙешмәкәр "тарихсы"лар республиканы рәхәтләнеп бысраҡҡа ҡойондорҙо ғына. Бәлки, рәсми Мәскәү беҙҙең хаҡтағы мәғлүмәтте тап ошо сығанаҡтарҙан йыйғандыр? Шуныһы ҡыҙыҡ, был сайттар артабан үҙ эшмәкәрлеген ҡайһы йүнәлештә алып барыр икән?

Бынан тыш, һуңғы йыл эсендә Рәсәй Дәүләт Думаһындағы Башҡортостан Республикаһының ҡайһы бер депутаттары ошо уҡ эш, йәғни Башҡортостан Республикаһы тураһында дөрөҫлөккә тап килмәгән мәғлүмәт таратыу менән шөғөлләнде. Улар араһында халҡыбыҙ вәкилдәре, хатта нәҫелнәсәбендә башҡорт өсөн ғәйәт оло эш башҡарған шәхестәр булған кешеләр ҙә бар. Улар Башҡортостандың яңы хөкүмәтендә ниндәйҙер урын биләүҙе маҡсат итеп ҡуя микән?

Ошо сығанаҡтарҙан һәм кешеләрҙән алынған мәғлүмәттәргә таянып, Үҙәк власть Башҡортостанда етәксе алышыныуы тыныс ҡына үтмәҫкә мөмкин, хатта ниндәйҙер ҡырҡыу хәлдәр булыу ихтимал, тип фараз ҡылды, ахыры. Шуға ла ҡабаланды улар. Шуға ла тиҙләтепме тиҙләттеләр. Тимәк, ҡурҡҡан булғандар...

Киләсәккә аяҡ баҫабыҙ, тигәйнем бит әле өҫтәрәк. Был ҡоро һүҙҙәр генә түгел. Дәлил итеп Президент Рөстәм Хәмитовтың инаугурациянан һуң яңғыраҡан сығышынан бер генә өҙөмтә килтерәксемен: "XXI быуат - юғары технологиялар, инновацион үҫеш, мәғлүмәт йәһәтенән алға китеш быуаты. Республика был процестарҙан ситтә торорға тейеш түгел. Сеймал иҡтисады - беҙҙең юл түгел. Машина һәм приборҙар эшләү, двигателдәр һәм ҡатмарлы ҡорамалдар етештереү, программалы продукттар һәм мәғлүмәт тапшырыуҙың яңы саралары, экология һәм энергияны һөҙөмтәле ҡулланыу беҙҙең ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙҙың үҙәгендә булырға тейеш.

Республика эре фәнни көстәр, билдәле инвестицион фондтар һәм структуралар, ноу-хау өҫтөндә эшләүселәрҙе үҙенә тартып тороусы үҙәк булырға тейеш. Үҙебеҙҙә юғары технологиялы инновацион үҙәктәр асыу өсөн, шулай уҡ Сколково кеүек күләмле Рәсәй проекттарында ҡатнашыу өсөн шарттар булдырырға кәрәк".

Президент, ысынлап та, үҙенә бирелгән осор эсендә (ә ул, онотмағыҙ, Рәсәй Президенты тарафынан сикләнеүе йәки оҙайтылыуы мөмкин) ошо һүҙҙәрҙең бер өлөшөн генә тормошҡа ашырып өлгөрһә лә, Башҡортостан халҡы уға рәхмәтле генә буласаҡ.

Хәйерле юл теләйек уға, йәмәғәт!

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓БР Хөкүмәте йортонда он һәм икмәк баҙарындағы һәм республика ҡалаларында иген запасы буйынса хәлгә арналған кәңәшмә үтте. Билдәләнеүенсә, илдә һуңғы ваҡытта он һәм иген хаҡтары күтәрелә башлаған. Әммә республикала хаҡтар артыуына сәбәп юҡ. Әле Башҡортостанда байтаҡ иген запасы бар. Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәттең БР буйынса идаралығы етәксеһе Зөлфиә Аҡбашева хаҡтарҙы яһалма арттырыуҙың аҙағы күңелһеҙ тамамланыу мөмкинлеген белдерҙе. Былтырҙан бындай эштәр өсөн енәйәт яуаплылығына тарттырыу язаһы индерелгән.

✓Наркотиктар һатылған урындарҙы асыҡлау буйынса үткәрелгән Бөтә Рәсәй интерактив акция ваҡытында республикала "Ҡайнар линия" телефонына 72 оператив хәбәр килгән. 124 шылтыратыусы наркомандарҙы дауалау буйынса мәғлүмәт алырға теләгән. Оператив шылтыратыуҙар эҙенән 147 наркоенәйәт асыҡланған, 126 енәйәт эше ҡуҙғатылған,82 нарқопритон ябылған, йөҙләп гектарҙа наркотиклы үҫемлектәр үҫтереү урындары асыҡланған. "Ҡайнар линия" номеры (347) 250-20-30 эшләүен дауам итә.

✓Континенталь хоккей лигаһы 2010/2011 йылдар сезонына Рәсәй Асыҡ чемпионаты матчтарының календарын раҫланы. Лиганың III сезонын асыу 8 сентябрҙә Ҡаҙанда Асыу кубогы өсөн матчы менән "Аҡ барыҫ" һәм ОХК "Динамо" (Мәскәү) араһында буласаҡ."Салауат Юлаев" сезондағы тәүге ярышты 9 сентябрҙә Өфөлә Силәбе "Трактор"сылары, 13 сентябрҙә "Магнитка"лар менән үткәрәсәк. 17 сентябрҙә Ҡаҙағстанға "Барыҫ"тар менән уйнарға китәсәк. Халыҡ-ара матч 3 ноябрҙә Словакияның "Лев" командаһы менән буласаҡ. Чемпионат 2011 йылдың 20 февралендә тамамланасаҡ.

✓БР Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, республикала 153 гектар майҙанда иген культуралары сабылған, 135 гектарҙа һуғып алынған. Уңдырышлылыҡ ҙур түгел - гектарынан 9,6 центнер. Әле республикала барлығы 130 мең тонна иген һуғып алынған. 13 районда, башлыса Урал аръяғы райондарында, иген йәшел әле, урып йыйыуға август баштарында ғына төшәсәктәр.

✓ Бөгөнгө көндә 70 дөйөм белем биреү учреждениеһы мәктәп автобустарына мохтажлыҡ кисерә. Автобустар башлыса төпкөл ауылдарҙа йәшәүсе уҡыусыларҙы мәктәпкә ташыу өсөн кәрәк.



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠАЛА БЮДЖЕТЫ...
## көрсөккә тиклемге кимәлгә сыҡты

**Өфөнөң бюджеты иҡтисади көрсөккә тиклемге кимәленә етте. Был турала БР Финанс министрлығының Территориаль финанс идаралығы башлығы Илгиз Насыртдинов белдерҙе. Уның әйтеүенсә, Өфө буйынса ағымдағы йыл килеме илдең бюджет системаһын 52 миллиард һумға тулыландырған. Уның 30 миллиарды - федераль, 18 миллиарды - республика һәм 4,279 миллиарды ҡала ҡаҙнаһына күскән.**

-Был күрһәткес былтырғы йыл менән сағыштырғанда 14,8 процентҡа юғарыраҡ, һәҙәмтәлә, ҡала бюджеты 2008 йылғы кимәлгә сыҡты, - тине Илгиз Насыртдинов.

Ҡала бюджетының бер өлөшөн, элеккесә, физик шәхестәрҙең килеменә һалынған һалым биләй, ул Өфөнөң шәхси килеменең 45,5 процентын алып тора. Бәләкәй һәм урта бизнес предприятиелары килеменә һалым, муниципаль милекте арендалауҙан һәм уны хосусилаштырыуҙан килгән килем ҡала бюджетының төп өлөшөн тәшкил итә.

Тәүге ярты йыллыҡ эсендә бюджеттың яҡынса 42 проценты мәғариф өсөн сығымдарға тотонолған. Икенсе урында торлаҡ-коммуналь хужалыҡтары тора - 1,217 миллиард һум. Әйткәндәй, был һан былтырғы менән сағыштырғанда ике тапҡырға кәмерәк. Ҡала электр транспорты һәм мәҙәниәт һәм киң мәғлүмәт саралары үҫеше өлкәләрендә лә сығымдар быйыл аҙыраҡ булған. Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге сығымдар 980 миллион һум тәшкил иткән, был һан былтырғы йыл менән сағыштырғанда 8 миллион һумға күберәк.

* * *

**БР Профсоюздар федерацияһының балалар баҡсалары хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡын арттырыу буйынса тәҡдимен республика етәкселеге лә хупланы.**

Башҡортостан профсоюздары июнь аҙағында балалар баҡсаларында эшләүселәрҙең эш хаҡына өҫтәмә түләү кәрәклеге тураһындағы тәҡдим менән республиканың Финанс министрлығына мөрәжәғәт итә. БР Президенты Рөстәм Хәмитов ҡарары менән 1 августан тәрбиәселәргә - 1000, уларҙың ярҙамсыларына 500 һум күләмендәге өҫтәмә аҡса түләнәсәк. Иҫәпләүҙәр буйынса, был проект өсөн 400 миллион һум кәрәк буласаҡ.

* * *

**Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов БР Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары, финанс министры Айрат Ғәскәровҡа мәктәп автобустары һатып алыуға республика бюджетынан финанс сығымдар бүлеү өсөн тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты.**

"Мәғариф" милли проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә республикала 2006 йылдан алып федераль һәм республика бюджеты иҫәбенә 516 автобус һатып алынған. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бөгөнгө көндә 70 дөйөм белем биреү учреждениеһы мәктәп автобустарына мохтажлыҡ кисерә. Автобустар башлыса төпкөл ауылдарҙа йәшәүсе уҡыусыларҙы мәктәпкә ташыу өсөн дә, олимпиадаларҙа, ярыштарҙа, конкурстарҙа ҡатнашыу өсөн дә кәрәк.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Сит илдәрҙә йәше-ҡарты рәхәтләнеп велосипедтарҙа елдерә. Улар өсөн махсус юлдар эшләнгән, "Арттан машина төкөрмө?", "Ҡабырғанан бәрҙерерме?" тип ҡурҡаһы түгел. Ә бит велосипед хәҙерге заман өсөн ҡалала иң ҡулай транспорт. Уңайлы ла, еңел дә, "тығын"дар ҙа тотҡарлыҡ түгел.**

# ВЕЛОСИПЕД ЮЛЫ...
## Өфөлә лә буласаҡ!

Тиҙҙән баш ҡалала төҙөләсәк яңы микрорайондарҙа төп транспорт юлы менән бер рәттән, велосипедсылар өсөн дә махсус юлдар эшләнәсәк. Был хаҡта Өфө ҡала округы Советында уҙған матбуғат конференцияһында Өфө ҡала округы хакимиәтенең архитектура һәм ҡала төҙөлөшөнөң баш идарағы башлығы урынбаҫары Галина Чиглинцева белдерҙе.

Халҡы миллион ярымға етә барған ҙур мегаполиста, уйлап ҡараһаң, транспорт, юлдар мәсьәләһе әле лә киҫкен булып ҡала. Мәсәлән, ҡайһы бер урамдарҙа, бигерәк тә был төп магистралдәрҙең береһе булған Октябрь проспектына ҡағыла, махсус билдәләнгән урында ла юлды аша сыға алмай торорға тура килә. Йәйләп был проблема бөтөрөләсәк. Бының өсөн ер аҫты һәм ер өҫтө юлдары, күперҙәр төҙөү планлаштырыла. Автострада булып һаналған Салауат Юлаев проспектын оҙайтыу киләсәктә артабан дауам ителәсәк. Шулай уҡ башҡа юлдарҙа ла транспорт өсөн уңайлы боролоштар, юл саттары һ.б. ҡоролмалар эшләнәсәк.

Әлеге ваҡытҡа 15 планировка проекты әҙерләнгән, уларҙың 10-ыһы раҫланған. Инвесторҙарҙың заказы буйынса 15 планировка проекты эшләнгән, шуларҙың 12-һе раҫланған. Улар аныҡ биҫтәнең һәм кварталдарҙың, ижтимағи үҙәктәрҙең транспорт менән тәьмин ителеү мәсьәләһен хәл итәсәк.

Шулай уҡ баш ҡаланың экологик хәл-торошон яҡшыртыу, йорт ихаталарының автотранспорт менән тулыуына юл ҡуймау маҡсатынан 2010-2020 йылдарға Өфөлә гараждар төҙөү маҡсатлы программаһы әҙерләнә.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

Көн һайын эшкә барғанда йәки ҡайтҡанда иғтибар итәһегеҙҙер: Өфөнөң тап үҙәгендәге бер юлы дүрт - Галле округы, Коммунистик, Цюрупа, Комсомол урамдарында ремонт эштәре бара.

"Галле округы" урамында даими тығындар була торғайны. Сөнки был урам баш ҡаланың транспорт "ҡапҡа"һының береһе тип һанала. Былтыр уның бер - Октябрь проспектынан Комсомол урамына тиклемге өлөшө реконструкция кисерһә, бөгөн Зорге урамына тиклемге арауығы ремонтлана. Ә Комсомол урамының Көньяҡ тыҡрығынан алып Урман техникумы урамына тиклемге өлөшө киңәйтелә.

Шулай уҡ Цюрупа урамынан йөрөүсе транспорт ағымы артыуына бәйле, унда ла ремонт эштәре гөрләй. Әле Киров һәм Достоевский урамдары араһы ремонтлана. Реконструкциянан һуң ошо урам бер ярым тапҡырға киңәйеп, унда ике йүнәлештә лә икешәр һыҙат урынына өсәр һыҙат буласаҡ. Ә инде аталған урамдар сатында боролоштар киңәйтеләсәк.

Быйыл, ниһайәт, Ҡунаҡһарай районындағы уңайһыҙлыҡтар ҙа бөтәсәк. Коммунистик урамының Ленин урамынан Ҡарл Маркс урамына тиклемге өлөшө киңәйәсәк. Йәйәүлеләр йөрөйәсәк тротуарҙарҙа плиталар һалынасаҡ, ә Өфө дәүләт авиация техник университетының төп корпусы алдында йүкә һәм ҡайын ағастары аллеяһы үҫәсәк. Өҫтәүенә, был районда ике яңы автотуҡталҡа барлыҡҡа киләсәк, улар бер юлы 100 машинаны парковкалау мөмкинлеге бирәсәк.

Шулай итеп, тиҙҙән баш ҡаланың ошо атап үтелгән урамдарын танымай ҙа торорһоғоҙ әле. Ни генә тимә, улар 10 метрға киңәйәсәк, тимәк, юлдарҙа тығындар ҙа кәмейәсәк, һауаны төрлө транспорттан сыҡҡан төтөн дә ул ҡәҙәре бысратмаясаҡ, тип өмөт итәйек.

Зәйтүнә ХӘБИРОВА.



# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Миҙгел умартасылар өсөн дә еңелдән булманы. Башҡортостандың Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Әмир Ишемғолов әйтеүенсә, үҙәк умартасылары балды башлыса йүкәнән алған. Республикала йүкәнән йылына 545 тонна бал алырға мөмкин, әммә бал ҡорттары уның 175 тоннаһын ғына йыйып өлгөрә. Йүкә күпләп үҫкән райондарҙа - Нуриман, Бөрйән, Архангел, Ейәнсура, Ғафури, Ишембайҙа бал уңышы яҡшы булған. Башҡортостан умартасылары әлеге мәлдә көнбағыш һәм ҡарабойҙай балы ағыҙып алыу менән мәшғүл.

✓Черниковка биҫтәһенең "Азатлыҡ" урамында тыйылған тәмәке ҡатнашмалары менән һатыу итеүсе магазин ябылған. Бында спайс һатыуҙан алынған килем көнөнә 500 мең һумға тиклем еткән булған.

✓Өфөлә һуғыш ветерандарының фатирҙарын ремонтлау эштәре Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығы байрамы алдынан башланғайны, хәҙер ул тамамланыу алдында. Баш ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Ирек Ялалов әйтеүенсә, әле 315 фатирҙа ремонт эштәре тамамланған. 180 фатир - ҡала округы хакимиәте бюджеты, 60 фатир депутаттар корпусы тырышлығы менән, ҡалғандары бюджеттан тыш аҡса иҫәбенә ремонтланған.

✓Тәүге ярты йыллыҡта баш ҡала юлдарында 873 юл-транспорт фажиғәһе булған, 28 кеше һәләк булған, мендән ашыу кеше тән йәрәхәттәре алған. 591 юл-транспорт һәләкәте ир-ат водителдәр ғәйебе менән эшләнгән. 16 өҙөлгән ғүмер һәм 712 яралы - улар намыҫында. Биш фажиғәнең сәбәпсеһе - эскән килеш рулгә ултырыусы. Гүзәл заттар ғәйебе менән 101 юл-транспорт һәләкәте булған, өс кеше һәләк булған, 112 кеше йәрәхәтләнгән. Бер осраҡта ҡатын-ҡыҙ водитель иҫерек булған.

✓Йыл башынан республикала 688 ВИЧ-инфекциялы кеше теркәлгән. Әлеге ваҡытта төбәктә ошо хәүефле сиргә дусар булыусы 8014 кеше рәсми иҫәптә тора. Былтыр республикала ВИЧ-инфекциялы әсәйҙәрҙән 188 сабый, быйыл иһә тәүге ярты йыллыҡта 120 бала донъяға килгән. Ауырыу әсәйҙән инфекция биш сабыйға күскән. Ярты йылда 117 ВИЧ-инфекциялы кеше вафат булған.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# КЕЙЕҘҘӘРҘӘ...

## миллилек төҫтәре

**(Башы 1-се биттә).**

Сибай ҡалаһынан килгән Асия Солтан ҡыҙы Ғәйнуллина ҡатын-ҡыҙҙарҙың милли кейеменең бер өлөшө - һаҡалды кейеҙ материалдан яһарға ниәт итә. Өфөләге 1-се һанлы сәнғәт мәктәбе уҡытыусыһы О. Серебренникова кейеҙҙә ҡолоно менән бейәне һынландырмаҡсы. Минең эшем "Ватан" тип атала, ти ул. Ейәнсура районы Иҫәнғолдан килгән Айгөл Бикәнованың эше "Тәүтөйәк" тип атала. Ул аттар, мамонттарҙы кейеҙҙә сағылдырасаҡ. Өфөнөң М. Кәрим исемендәге 150-се башҡорт гимназияһынан килгән Әнилә Ирмәкованың эше "Һомайғош" тип атала. Бөрйән районы оҫталары, нигеҙҙә, Яңы Мөсәт һәм Яңы Собханғолдан йыйылған. Улар тәү инәбеҙ Йәнбикә менән тәү атабыҙ Йәнбирҙене сағылдырырға ниәт итә. Гөлдәр Зыянбаева, Филиә Көҫәпова, Әклимә Манапова, Рәмзиә Уразаева, Илүзә Юлбирҙина, Гөлназ Сәйәхова, сәнғәт мәктәбенән Таңһылыу Ғимрановалар район намыҫын яҡлаясаҡ. Көйөргәҙе районында халыҡ ижады белгесе булып эшләүсе Йәмилә Сабир ҡыҙы Рамазанова үҙ эшенә бөтә йөрәген һалған. Уның кейеҙендә Шүлгән мәмерйәһе, таш быуат рәссамы төшөргән мамонт, ат һүрәттәре, яҡтылыҡ сығанағы - ҡояш, эпосыбыҙ геройҙары, ете тажлы ҡурай урын аласаҡ. Ҡыҫҡаһы, ҡабарынҡы, аҡ, ҡара, күккә буялған йөндәр, оҫталар ҡулы ҡағылғас, Урал батыр, Шүлгән, Аҡбуҙат, Йәнбирҙе менән Йәнбикә һ.б. сүрәтендә тарихыбыҙҙың, рухыбыҙҙың бер сағылышы булып, тарих йылъяҙмаһына уйыла, күңелдәргә һеңә, миллилек төҫөндә балҡый.

Эскиздар, мастер-класс барышы менән танышҡанда һарыҡ йөнөнән шундай ҙа сәнғәт әҫәре ижад итеп булырын башҡа ла килтермәгәйнек. Лагерь баҡсаһына эленгән әҙер кейеҙҙәрҙе күргәс, телһеҙ ҡалдыҡ. Ысын оҫталар ҡулы ҡағылғас, Бөрйәнебеҙҙең эпостар төйәгенә сәйәхәт ҡылынғас, кейеҙ баҫыусылар береһенән-береһе матур ижад емеше хасил иткән. Әйтерһең дә, тарих йылъяҙмаһын барлап, риүәйәт-легендалар дәүеренә юлланып, эпостарыбыҙҙың рухи аңҡышын тойғандай булдыҡ.

Жюри ағзаларына еңеүсене билдәләүе еңел булмағандыр. Нефтекама ҡалаһы оҫтаһы, балалар сәнғәт мәктәбе уҡытыусыһы Ғиләжева Земфира Филхәт ҡыҙы Гран-при яуланы. "Алдан башҡорт халҡының мәшһүр эпосы "Урал батыр"ҙы өйрәндем. 2006 йылда Әбйәлилдә ошондай семинарҙа ҡатнашып, "Бөрйән ҡыҙҙары бейеүе" тигән эшем менән республика буйынса үткәрелгән урта махсус уҡыу йорто уҡытыусылары араһындағы конкурста беренсе урын алғайным. Үҙем Ауырғазы районы Талбазы ауылынан. Өфөлә 2-се һанлы һөнәрселек училищеһында, Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт университетының художестволы графика факультетында уҡыным. Бөрйәндә үткән сара юғары кимәлдә ойошторолған. Шүлгән мәмерйәһенә барғас, алдан уйлаған эскиздарҙы тулыһынса тиерлек үҙгәрттем. Тәбиғәттең илаһи матурлығы ижади эшкә булышлыҡ итте. Оҫталар менән аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу ҙа күп нәмә бирҙе", - ти ул, шатлығын йәшермәй.

Ошо сараның кураторы Кайдалова Кәримә Шәрип ҡыҙы ла тәьҫораттары менән уртаҡлашты: "Халҡыбыҙҙың боронғо кәсебе - кейеҙ баҫыуҙы тергеҙеү, уның оҫталар ҡулында, күңелендә һаҡланған мөғжизәле серҙәрен йәш быуынға еткереү идеяһы икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында күтәрелде. Ошонан һуң Әбйәлил оҫталары хеҙмәт-фольклор байрамы ойошторҙо. "Аҡ кейеҙгә баҫһам" сараһын әбйәлилдәр иҫ китмәле итеп үткәрҙе. Әбйәлил оҫталары күп нәмәгә өйрәтте. Хәҙер кейеҙ баҫыу буйынса оҫталарыбыҙ танылa бара. Мәҫәлән, Гүзәл Мөхәмәтйәрова кейеҙ нигеҙендә Ш. Бабич премияһын алды. Ольга Литвиненко Рәсәй Рәссамдар союзы ағзаһы булды. Кейеҙселәрҙең шундай үҙенсәлекле яғы бар: кем нимә белә, шуны башҡаларға өйрәтә, берәү ҙә эш серен йәшермәй. Оҫталар Интернет аша бер-береһе менән аралаша. Салауат Юлаев көндәрендә, Республика көнөндә эштәребеҙҙән күргәҙмә ҡуйырға ниәт итәбеҙ. Шүлгәнташҡа сәйәхәт иҫ киткес булды. Унда алған тәьҫораттарҙы күңел менән ҡабул итеп, аҡыл менән аңлап бөтөргә кәрәк әле".

Ырымбурҙан инвалид балаһы менән килгән Кәримә Виллер үҙ эшенә бөтә йөрәген һалған. Уларҙың ғаилә эше иҫ киткес. Күккә уҡталған аҡҡош афәт-бәләнәнән балаһын ҡурсалаусы әсәне хәтерләтһә, ерҙә өймәкләшеп мыжғышҡан йыландар ҡара көстәрҙең барлығына ишара.

Аталы-ҡыҙлы Юлиә менән Фидаил Хәбибуллиндарҙың "Үлемһеҙлек юлы" эше бай фәлсәфәгә эйә картинаны хәтерләтә. Кейеҙҙең бер яғында аҡ һыбайлы, икенсе яғында ҡара һыбайлы елеп бара, ҡоштар тубы, ерҙәге



тормош әйләнеше - барыһы ла ысынбарлыҡты хәтерләтә. БДПУ-ның художестволы графика факультетында өсөнсө курста уҡыусы Юлиә быйыл сарала алтынсы тапҡыр ҡатнаша. Шишмә һылыуы атаһын үҙенең юлынан эйәрткән. Бөрйән оҫталарының эше лә иң сағыуы булды. Контраст төҫтәр: аҡ, ҡара өҫтөнлөк итә. Рәссам Рәмил Иманғолов эскизы буйынса баҫылған кейеҙ иғтибарҙы әллә ҡайҙан тартып тора.

Ҡыҫҡаһы, кейеҙ баҫыусыларҙың эшенә баһа биреү мөмкин түгел. Рух ҡөҙрәте, рух аһәңе, йөрәк тауышы, ҡул тылсымы һеңгәс, кейеҙҙәрҙең һәр береһе - тере картина, тарихыбыҙ сағылышы, ысын сәнғәт әҫәре. Ошондай саралар үтеп, үҙ эшенә мөкиббән бирелгән оҫталар, остаздар ярыша икән, халҡыбыҙҙың милли кәсеп-йолаһы - кейеҙ баҫыу тарих сөңгөлөнә суммаясаҡ. Йәшәйешебеҙҙең бер өлөшө булып, илаһи төҫтәрҙә балҡыясаҡ әле ул.

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ЭШТӘН БУШАТТЫЛАР

**Ҡыҙымды законһыҙ рәүештә эштән бушаттылар, йәнәһе, ҡыҫҡарттылар. Ә урынына тиҙ генә икенсе кешене алып ҡуйҙылар. Өҫтәүенә, йәшәгән урынында ваҡытлыса теркәлгән тип, эш менән тәьмин итеү үҙәге ҡыҙымды иҫәпкә ҡуйыуҙан баш тарта. Беҙгә ни эшләргә?**

- Әгәр ҡыҙығыҙ эштән бушатыуҙары менән килешмәһә, БР Дәүләт хеҙмәт инспекцияһына мөрәжәғәт итһен. Унда был факттың законға нигеҙләнгән булыуы тикшереләсәк. Ә икенсе мәсьәлә буйынса район прокуратураһына ғариза яҙығыҙ. Тикшереү органы үҙ ҡарарын сығарғас, уның төп нөсхәһен ҡулығыҙҙа тотоғоҙ, сөнки артабан БР Прокуратураһына мөрәжәғәт итергә тура килеүе бар.

## БАШ ТАРТА АЛА

**РФ Енәйәт кодексының 115-се статьяһы 1-се бүлеге буйынса енәйәт эше ниндәй судта (федераль йәки мировоймы) ҡаралырға тейеш? Экспертиза буйынса, һаулыҡҡа еңелсә зыян килтерелгән. Участка милицияһы эште мировой судҡа тапшырған. Судья, штраф түләү ихтималлығы менән янап, мировой килешеү яҙырға мәжбүр итте.**

- РФ Енәйәт-процессуаль кодекстың 31-се статьяһының 1-се өлөшөнә ярашлы, мировой судья енәйәттәр өсөн иң ҙур язаға тарттырыу 3-5 йылға иркенән мәхрүм итеү булған енәйәт эштәрен ҡарай (тик был статьяла иҫәпләп кителгән енәйәт эштәре бында ҡарамай, РФ Енәйәт кодексының 115-се статьяһы был иҫәпкә инмәй. РФ Енәйәт кодексының 115-се статьяһының 1-се өлөшөндә әйтелгән енәйәт өсөн иректән мәхрүм итеү язаһы ҡаралмаған. Шулай итеп, һеҙҙең осраҡтағы енәйәт эшен мировой судья ҡарай. Шул уҡ ваҡытта яҡтарҙың килешеүе менән бәйле (әгәр ҙә енәйәт эшләүсе ғәйебен танып, уны ғәфү итерлек аҙым яһаған икән), зыян күреүсенең ошо хаҡтағы ғаризаһы нигеҙендә суд енәйәт эшен ҡарауҙы туҡтатырға мөмкин. Ләкин зыян күреүсе килешеү хаҡында ғаризаны үҙ теләге менән яҙа. Килешеүҙән баш тартҡан хәлдә лә уға бер ниндәй ҙә штраф санкциялары ҡаралмаған.

## СИРАТҠА ТОРОП БУЛА

**Өс ғаилә (атайым менән әсәйем, вуздың һуңғы курсы студенты мин һәм ағайым ҡатыны, ике балаһы менән) хосусилаштырылмаған ике бүлмәле "хрущевка"ла йәшәйбеҙ. Беҙҙе торлаҡҡа мохтаж булғандар сиратына ҡуйырға тейештәрме?**

- Торлаҡтың дөйөм майҙаны ғаиләләгә бер кешегә иҫәп нормаһынан кәмерәк тәьмин ителгәндәр; торлаҡ бинаһы өсөн тейешле талаптарға яуап бирмәгән биналарҙа йәшәүселәр; шулай уҡ ғаиләлә уның менән бер фатирҙа йәшәү мөмкин булмаған, ләкин социаль найм килешеүе йәки милекселек хоҡуғы буйынса йәшәрлек башҡаса торлаҡ бинаһы булмаған ғаиләлә хроник сир менән яфаланыусы булған хәлдә улар РФ Торлаҡ кодексының 51-се статьяһына ярашлы, социаль найм килешеүе буйынса бирелә торған торлаҡҡа мохтаж тип иҫәпләнә. Бындай төр сирҙәрҙең исемлеге РФ Хөкүмәте тарафынан билдәләнә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Аллергия



❖ 1-әр ҡалаҡ дегәнәк һәм бәпембә тамырҙарын, 1-әр балғалаҡ аҡ сәскә һәм кесерткән япрағын ярты литр ҡайнар һыу менән бешекләп, ярты сәғәткә төнәтергә ҡуйырға. 10 көн дауамында ошо төнәтмәне көнөнә өс тапҡыр ашар алдынан эсергә.

❖ 5 ҡалаҡ һарығүҙ (золототысячник), 3 ҡалаҡ бәпембә тамыры, 1 ҡалаҡ аҡ сәскә, 2 ҡалаҡ онталған гөлйемеште бергә болғатырға ла айырым һауытҡа һалырға. Ошо дарыу үләндәренән 1 ҡалаҡ алып 1 стакан ҡайнар һыу менән бешекләгәс, 1 сәғәт тотоғоҙ. Ашар алдынан көнөнә өс тапҡыр эсергә. Дауалау курсы 2 аҙна.

❖ 2 ҡалаҡ шыршы үләне (полевой хвощ), 1 ҡалаҡ кукуруз, 4 ҡалаҡ һары мәтрүшкәне болғатырға һәм 1 ҡалаҡ дарыу үләндәре ҡатнашмаһына 1 стакан һалҡын һыу ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдырырға. Ҡайнар хәлгә еткереп, 40 минут төнәткәс, 10 көн дауамында 1-әр ҡалаҡлап көнөнә өс тапҡыр эсергә.

❖ Ит турағыстан ҡабығы менән 100 грамм лимонды, 100 грамм керәнде үткәргәс, 100 грамм ҡарабойҙай балы ҡушып болғатырға ла көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашарға. Әммә ашҡаҙан сирҙәре булғандарға был дауаны ҡулланырға ярамай.

## Иммунитет нығытыу

Пародонтоз, йыш һыуыҡ тейҙергәндә, имтихандар алдынан йәки уларҙан һуң иммунитетты нығытыу өсөн: 2 ҡалаҡ саған бөрөһөнә 2 ҡалаҡ бал һалып, һауыты менән 5 минут ҡайнап ултырған һыуҙа тоторға. 1 аҙна буйы көнөнә ике тапҡыр яртышар балғалаҡ төнәтмәне тел аҫтына һалырға.

## Ашҡаҙан

Ашҡаҙан аҫты биҙе эшен һәм ашҡаҙандың әселеген яйға һалыу өсөн: 2 ҡалаҡ юл үләне япрағын 2 стакан ҡайнар һыу менән бешекләп, төнгөлөккә термоста тотоп, 10 көн самаһы эсһәң, ашҡаҙаның яфаламаҫ.

## Күҙ төптәре шешеп торһа

Петрушка япраҡтарын сайҡатып, ваҡ итеп турап, марляға һалырға һәм биткә 20-30 минутҡа ябырға.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

ПАРАДОКС

**Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә рәсәйлеләрҙең пенсия йәшен кисектереү мәсьәләһе рәсми кимәлдә йәмәғәтселек игтибарына тәү тапҡыр ғына сығарылмай, әленән-әле ҡыҙыу бәхәстәр булып тора. Бынан бер нисә йыл элек Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең вице-премьеры булып эшләгән Валентина Матвиенко үҙенә хас ҡәтғилек менән ул саҡтағы дискуссияға сик ҡуйыуға өлгәшкәйне. Хәйер, кем белә, был мәсьәлә менән халыҡты ҡуҙғытып алыу йәмәғәтселек фекерен "өйрәнеү", уның тын алышын "разведкалау"ҙың үҙенә күрә бер алымы булғандыр. Юғиһә, ул үгеҙҙе үсектергән ҡыҙыл сепрәк киҫәгеләй, әленән-әле бәхәс аренаһына ырғытылмаҫ ине бит.**




# ЙӘШӘГЕҢ КИЛҺӘ...

## үлгәнсе эшлә!

Һуңғы көндәрҙә сыҡҡан үҙәк ваҡытлы матбуғат баҫмалары биттәре тағы ла ошо тема менән сыбарлана башланы. Күрәһең, инде күптән хәл ителгән мәсьәләне тағы ла ҡуҙғатып, сираттағы "һөйәк ырғытыу" булалыр инде быныһы, сөнки етди, киҫкен реформа алдынан халыҡты уға әҙерләү, "прививкалау"ҙың сираттағы йәки иң аҙаҡҡы этабы башланды бит. Аҙаҡҡыһылыр ҙа, бәлки, сөнки был юлы идея авторы үҙенең исемен йәшермәй. Яңыраҡ Рәсәй финанс министры Алексей Кудрин тап ошо мәсьәлә буйынса РФ Дәүләт Думаһы ултырышында сығыш яһаны. Әйткәндәй, министр ниәтенә ҡаршы сығыусы оппоненттың да исемшәрифе билдәле, ул "Берҙәм Рәсәй" партияһынан депутат Андрей Исаев. Бәй-бәй, власть фирҡәһе? Хөкүмәт вәкиле программаһына ҡаршы? Быны нисек аңларға? Ә бына нисек. Эксперттар фаразлауынса, бында "Берҙәм Рәсәй" партияһына халыҡ ҡайғыһы - төштән һуң; был фирҡә өсөн бөтәһенән бигерәк үҙ-үҙен рекламалау, сәйәси "капитал" туплау һәм рейтинг һаҡлау мөһим.

"Кудриндың маҡсаты, ярай, аныҡ - ул бюджет дефицитын кәметеү яғын ҡайыра, ә бына Думаның хеҙмәт буйынса комитеты башлығы Исаевтың маҡсаты - үҙен һәм үҙенең партияһын сәйәси хәүеф-хәтәрҙән һаҡлап ҡалыу, - ти "Петербург сәйәсәте" фонды президенты Михаил Виноградов. - Бына-бына Дәүләт Думаһына һайлауҙар алдында торабыҙ, ә пенсия йәшен кисектереү мәсьәләһе халыҡ араһында бер ҙә генә популярлыҡ менән файҙаланмай - бына шуға күрә лә "Берҙәм Рәсәй" Кудринды тәнҡитләгән булып, үҙен рейтингы төшөп китеүҙән ҡурсаларға маташа".

Эксперт фекеренсә, пенсияға сығыу йәшен барыбер оҙайтасаҡтар. Ул, бая әйтелеүенсә, нигеҙҙә хәл ителгән мәсьәлә инде, ә бына "Берҙәм Рәсәй" яғынан ишетелгән тауыш әйләре иһә һайлаунарҙан һуң шымып ҡаласаҡ...

### Хаҡлы ял - ҡайындар араһында?..

Икенсе бер эксперттар финанс министры Кудрин позицияһын яҡлап, уның маҡсатына түбәндәгесә аңлатма бирә: Пенсия фонды әле үк наҡыслыҡ кисерә, һәм ул йылдан-йыл бөлә барасаҡ. Пенсия түләргә аҡса етһен өсөн Кудрин пенсионерҙар сафының артыуын бер аҙ "йүгәнләргә" теләй. Шул уҡ ваҡытта был эксперттар һәм политологтар Исаев позицияһының әхләҡи яғын да үҙенсә баһаларға тырыша. Беҙҙең илдә былай ҙа уртаса ғүмер оҙайлығы бик сонтор, ә инде һаулығы ҡаҡшап, бөлтерәп бөткән ҡарттарҙы эшләтеүҙең, беренсенән, һөҙөмтәһе нисек булыр; икенсенән, был өлкән йәштәгеләрҙең "хаҡлы ялы"на балта сабыу менән бер, тигәнерәк фекерҙә улар.

Хаҡлы ял, тигәндән... Уртаса 7-8 мең пенсия аҡсаһына ял итеп ятыу нисек була икән ул? Шуныһы ҡыҙыҡ. Ауылдарҙа, ярай ҙа, мал-тыуар тотоп, йәшелсә-емеш үҫтереп, үҙ тамаҡтарын үҙҙәре ҡайғыртҡандарға ла ғүмер буйы бил бөгөүе (уның ҡарауы - үҙе өсөн!) еңел булмаһа ла, барыбер сығымдар ярайһы ғына (мал-тыуарына - аҙыҡ, ягылыҡ һ.б.). Ә ҡала пенсионерҙарының айлыҡ пособиеһының яртыһы коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә китһә, 3-4 меңгә ай буйы аслы-туҡлы көн күрергә тура килә. Шуға күрә пенсия йәшенә етеп, "хаҡлы" ялға китеүселәрҙең күпселеге барыбер эшләүен дауам итә. Хаҡлы ял, тигән һайын, бынан элегерәк үк әле биленә балтаһын ҡыҫтырып, иртәнсәк һайын леспромхоз эшенә ашығыусы 70 йәштәге бер ағайҙың моңһоу йәҙә күҙ алдына килә лә баҫа. "Пенсияға сыҡҡанына ун йыл бит инде, ағай, ниңә ялға китмәйһең?" тигән һорауға ул, зыярат яғына ымлап: "Эй, ҡәрендәш, беҙгә хаҡлы ял, ана, ҡайындар араһында..."- тип ауыр һулап ҡуйғайны. Теүәл бер йылдан ул, ысынлап та, әлеге "хаҡлы" ялына китеп тә барҙы. Мәгәр үлгәнсе балтаһын ҡулынан төшөрмәне...

### 2012 йылдан һуңмы?

Пенсия йәшен оҙайтыу хаҡында иҡтисадсылар ниндәй фекерҙә икән? Һүҙ ҙә юҡ, улар А. Кудрин планы яҡлы. Был сараның һөҙөмтәһе булмаһа, ул күпселек Европа илдәрендә ҡулланылыр инеме ни, тип һорауға һорау менән яуап ҡайтара улар. Икенсенән, уның тағы ла бер файҙалы яғы бар, йәнәһе: пенсия күләме лә артасаҡ икән. Кеше оҙағыраҡ эшләгән һайын, үҙенең пенсия капиталына күберәк взнос күсерәсәк.

Шулайын шулайҙыр ҙа бит, тик бына был хаҡтағы закон проектын нисек итеп Дума аша үткәрергә, тип баш ваталар хәҙер. Яҡын араларҙа Дума былдай законды ҡабул итмәйәсәк, моғайын. Йә булмаһа, был мәсьәләне ҡарауҙы 2012 йылдан һуңға ла ҡалдырмаҡсылар,сөнки был осорға парламент һәм президент һайлауҙары шыма ғына үтеп китеп, сәйәсмәндәргә һайлаусылар тауышының кәрәге ҡалмаясаҡ.

### Итәк ҡырҡып, еңямау

Сер түгел, беҙҙә бөтә популяр булмаған социаль-иҡтисади саралар, йәғни итәк ҡырҡып, еңямауҙар былай ҙа фәҡир халыҡ иңсәһенә эшләнә. Бюджет наҡыслығын кәметеү кеүек дәүләт эштәрендә халыҡ тиндәренең ниндәй ҡыҫылышы бар? Ә ни өсөн финанс көйләүенең башҡа бик күп төр механизмдары эшкә ҡушылмай һуң? Ҡасандыр ил байлыған үҙләштереп, майлы ҡалъя эләктереп ҡалған һәм хәҙер йәш һөйәркәләр менән сит илдәге зиннәтле һарайҙарында, яхталарында типтереүсе ҡатлам ни өсөн һуң илдәге финанс мәсьәләләрҙе көйләүҙә ҡатнашмай? Ә нинә депутаттар, бер-берһе елкәһендә ҡатланып ултырған дәүләт чиновниктары кеҫәһен бераү ҙә ҡапшамай? Ил базары ни өсөн бер көнлөк, сифатһыҙ Ҡытай тауары менән тулды, ә элек үҙебеҙҙең гөрләп торған предприятиелар, колхоз-совхоздар етемһерәп, буп-буш тороп ҡалды? Ярай, былар бөтәһе лә эмоция, ти. Ә ҡайҙа һуң, улай булғас дәүләтсә фекерләү һөҙөмтәһе, модернизация һәм башҡалар?

Тотош ил менән идара итеү, иҡтисад, финанс мәсьәләләрен ана шул күп һөйләнелгән модернизациялау нигеҙендә, фәнни күҙлектән сығып хәл итергә кәрәктер бит, ә итәк киҫеп ең яма - ул буй яҡтанды арҡырыға алып һалыу менән бәрәбәр түгелме ни? Әллә халыҡ елкәһе бар, ул бөтәһен дә күтәрәсәк, шуға ла Кудрин кеүектәр оптималь вариантар эҙләп, баш ватып та ултырмаясаҡ, бөтә ауырлыҡты халыҡ иңенә аударыуы еңел бит.

### Ике фараз

**1. Әгәр пенсия йәшен арттырһалар:** Рәсәй Федерацияһы Финанс министрлыны, был сара Пенсия фонды наҡыслығын байтаҡҡа иҫкәртәсәк, тип уйлай. Шул уҡ ваҡытта ул пенсия системаһы наҡыслығын үҙгәртә алмаясаҡ. 2015 йылға пенсия йәшен 65 йәшкә тиклем арттырыу тәүҙә йылына 82 миллиард һумға отош бирһә, биш йылдан ул 200 миллиард һумға барып етәсәк. Ә инде 2012 йылдан был сараны атҡарыу бюджет иҫәбенә 70 миллиард һум экономия килтерәсәк, ләкин 2020 йылдан алып ул кире һөҙөмтә бирә башлаясаҡ.

**2. Әгәр бөтәһе лә әлеге килеш ҡалһа:** Рәсәй Федерацияһының финанс министры А. Кудрин фекеренсә, әгәр пенсия йәше яҡын арала оҙайтылмаһа, хөкүмәт үҙенең социаль йөкләмәләрен үтәй алмаясаҡ. Рәсәй Пенсия фонды наҡыслығы (ошо йыл аҙағына ул 1 триллион һумға барып баҫасаҡ) пенсия күләмен һуңғы йылдарҙа өлгәшелгән кимәлдә тота алмаясаҡ. 2010 йылға эшләүсе халыҡ иҫәбе 200 меңгә кәмеһә, киләһе йыл улар һаны 300 мең тәшкил итәсәк. Ошондай шарттарҙа, әгәр бер ниндәй сара ла күрелмәһә, сеймал конъюнктураһына бәйле булмаған бөтә табыштар ҙа фәҡәт пенсия түләүгә генә китеп торасаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Ғәлимйән ДӘҮЛӘТБАЕВ, Өфө ҡалаһы, эшсе:**

- Хөкүмәт пенсия йәшен арттырыуҙы тағы ҡуҙғата. Минеңсә, был кәрәкмәҫ ине. Беҙҙә бит халыҡтың уртаса ғүмере былай ҙа бик ҡыҫҡа. Күптәр, айырыуса ирҙәр, әлеге пенсияһына ла барып етә алмай вафат була, сөнки Рәсәйҙә йәшәүе бер ваҡытта ла еңелдән булманы ябай халыҡҡа.

Мин аңлайым, мәҫәлән, ҡайҙалыр Греция оло йәштәгеләр пенсия реформаһына ҡаршы демонстрацияларға сығалар. Унда, исмаһам, йәшәү шарттары беҙҙекенән нык айырыла. Унда ҡатындар уртаса - 83, ирҙәр 77 йәшкә тиклем йәшәй. Өҫтәүенә, улар йылына 14 тапҡыр - һәр айҙан тыш, Раштыуаға һәм пасха көнөнә өҫтәмә пенсия ала. Хәҙер ана шул 13-сө, 14-се пенсияларын бөтөрөп, ҡатындарға 65 йәштән пенсия билдәләргә ниәтләнеүсе хөкүмәттәренә ҡаршы сығыштар бара. Уйлаһаң, ҡурҡыныс булып китә: Ер шары халҡы ҡартая, уларҙың ҡәҙере лә, кәрәге лә бөтә. Пенсиябыҙҙы яңынан тунап-бесеп бөтөрмәһәләр ярай ҙа...

**Алмабикә ҠӘҘЕРҒОЛОВА, Сибай ҡалаһы, хеҙмәткәр:**

- Әйткәндәй, нишләп әле тоталар ҙа ошо пенсионерҙарға йәбешәләр? Ғүмерҙәре буйы шул бюджет тәьмин итеү өсөн бил бөгөп, тир түгеп, ҡартайған көндәрендә лә уларға тынғылыҡ бирмәйҙәр. Улар хәҙер һуңғы тиндәре менән кемдер бүҫерғән бюджет тоғон ямап ултырырға тейеш. Оят бит был! Бюджет тәьмин итеүҙең исулдары күп бит, эшләһендәр, ни өсөн юғары эш хаҡы алып юғарыла ултыралар! Башты эшләтһәң, идея күп ул! Рәсәй Президенты Хакимиәте, Хөкүмәт аппаратында, министрлыҡтарҙа эш хаҡын ҡайтанан ҡарап сыҡһындар, әлеге хәлгә ярашлы итеп эш хаҡы тәғәйенләһендәр. Кәрәкмәгән дублер хеҙмәткәр, чиновниктарҙы ҡыҫҡартһындар. Ғөмүмән, дәүләт хеҙмәте штатын 20 процентҡа түгел, ә яртылаш ҡыҫҡартҡанда ла була, тип уйлайым.

**Эльвира ҠӘЙЕПҠОЛОВА, табип:**

- Пенсия йәшен оҙайтыр өсөн иң тәүҙә халыҡтың йәшәү кимәле һәм сәләмәтлек торошона күҙ һалыу мотлаҡтыр. Шуны аңламаймы икән ни Кудрин әфәнде? 50-55 йәш ул һәр кем өсөн кризис, организмдың ҡартлыҡҡа күсеү осоро. Тап ошо йәштәрҙә кешелә элек булмаған сирҙәр башлана, хроник ауырыуҙары көсәйә һ.б. Ә былдай сирле ҡарттарҙың эшенән хөкүмәт риза булырмы аҙаҡ? Ошо хаҡта уйларға ине.

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш




Воскресенский заводын 20-се числола ҡалдырып, кискә табан Бүләк тигән башҡорт ауылы йәйләүенә килеп еттек. Ул Бүләк старшина исеме менән аталған, заводтан 50 саҡырым тирәһендә урынлашҡан. Старшина беҙҙе бик алсаҡ ҡаршыланы; беҙ унының тирмәһенә инеп тә өлгөрмәнек, унда башҡорттар килеп тулды. Уларҙың һәр ҡайһыһы беҙҙең бында килеүебеҙҙең ысын сәбәбен белергә тырышты. Тәржемәсе аша аңлатып ҡараһаҡ та (сөнки башҡорттар араһында русса һөйләшеүселәр һирәк), уларҙың шикләнеүен күрҙек һәм үҙебеҙҙең дөрөҫ һөйләүебеҙгә ышандырыу өсөн татарсаға тәржемә ителгән Ырымбур губерна канцелярияһы указын уҡып ҡарарға бирҙек. Ул башҡорттарҙа беҙгә ҡарата ныҡлы ышаныс ҡына түгел, ихтирам да уятты. Уларҙың иң олоһлары, сүгәләп ултырып, әлеге указды үҙҙәренең башына һалып күрһәтте, был уларҙың указға һис һүҙһеҙ буйһоноуын һәм ярарға тырышыуын белдерә ине.

Шул ыңғайы башҡорттарҙың бүленеше һәм тәртип ҡағиҙәләре тураһында иҫкә алып, уҡыусыбыҙ иғтибарын ҡәнәғәтләндерәйек.

Башҡорттарҙың олоҫтарға һәм юлдарға (дороги) бүленеше хаҡында статский советник Рычков әфәнде үҙенең "Ырымбур топографияһы"нда бик төплө яҙып ҡалдырған. Ә мин уларҙың эске бүленеше хаҡында әйтеп үтәм. Башҡорттар араһында старшина беренсе шәхес һанала. Олоҫтарҙа уларҙың һаны төрлөсә, һәм һәр старшина ҡулы аҫтында күпмелер һандағы өйҙәр була. Старшина улар араһында артыҡ ҙур әһәмиәткә эйә булмаған эштәрҙе тикшереп, ҡул аҫтындағыларға яза биреү хоҡуғына эйә. Башҡорттарҙы линия хеҙмәтенә нарядҡа тәғәйенләү, йәиһә ниндәй ҙә булһа ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә айырым төркөмдәр төҙөп ебәреү тәртибен билдәләү ҙә унының ҡарамағында була.

Ул шәриғәттә* төп урынды биләүсе булып тора; партияларҙа башҡорттарға баш була; хөкүмәт указдары улар исеменә ебәрелә, шуның өсөн улар үҙ халҡы тарафынан ихтирам ителеп, шунан дан менән бергә килем дә ала; көтөүсе лә көтөүенән алып туҡлана бит. Старшина чинын улар Ырымбур губерна канцелярияһы билдәләүе буйынса һәм, башлыса, халыҡ теләгенә ярашлы ала.

Старшинанан түбәнерәк баҫҡысты старшина ярҙамсыһы биләй, уға бер ни тиклем идара итеү хоҡуғы бирелә, бер старшина китеп, икенсеһе ҡуйылғансы, төп урынды ул биләй.

Старшина ярҙамсыларынан һуң һәр йөҙ кешегә баш булған йөҙ баштары (сотниктар) килә, уларҙың бар власы ҡул аҫтындағыларҙы тикшереп тороуҙан ғибәрәт була, сөнки уларға тән язаһы ҡулланыу хоҡуғы бирелмәгән. Һәр старшина янында Ырымбур губерна канцелярияһы указы менән мишәрҙәрҙән тәғәйенләнгән писарь булып, уны бар нәмә менән тәьмин итеү башҡорттарға йөкмәтелә. Яҙыу эштәрен башҡарыуҙан тыш, улар башҡорттарҙың нимәләр эшләүен күҙәтеп, тикшереп тора; ебәрелгән указдарҙың теүәл үтәлеүен тәьмин итә; дөйөм тыныслыҡ булдырыу уларҙың төп бурысы булып, унының боҙолоуы хаҡында аҙ ғына булһа ла шик сыға ҡалһа, ул ошо хаҡта тейешле урындарға хәбәр итә. Башҡорттар араһында тейешле даирәләр тарафынан билдәләнеүсе төп шәхестәр ошолар була ла инде. Бында ебәрелгәндәрҙе хеҙмәтләндереү өсөн, башҡа ауылдарҙағы кеүек үк, ылау биреү тәртибен һәм башҡа эштәрҙе белеүсе старосталар һәм десятскийҙар һайлап ҡуйыла.

Ысын башҡорт йәйләүендә булырға тура килгәнлектән, ошо хаҡта ла бәйән итәйем.

Улар йәйләүгә ғаиләләргә бүленеп сыға, шуға күрә йәйләү туған-тыумасанан хасил була. Йәйләү урынын һәр саҡта ла йылға һәм шишмә буйҙарынан һайлап, малдар тирмәләргә яҡын килмәһен өсөн кәртәләп ҡуялар. Туҡланған ризыҡтары башлыса һөт аштарынан булғас, уларҙың йәйләүҙәге төп эштәре лә шуның менән бәйле. Иртә менән малдарын ҡыуып килтереп, бейәләрен һәм һыйырҙарын айырып алып, төрлө һауыттарға һауалар. Һыйыр һөтөнән май, төтөндә ыҫланған сыр яһайҙар. Улар айран тип аталған әсетелгән һөттө, татарҙарҙағы кеүек, ғәҙәти эсемлек итеп ҡуллана.

Бейә һөтөнән яһалған ҡымыҙ уларҙың иң яратҡан эсемлеге булып, уларҙың төп аҙыҡтарынан һанала. Ҡымыҙ бешеү өсөн уларҙа һаба тип аталған күн тоҡ ҡулланыла, уға бер аҙ әҫе һыу ҡушылған бейә һөтөн ҡойоп, төпкә ултырмаһын һәм эремсеккә әйләнмәһен өсөн махсус эшләнгән бутағыс менән бутап торалар.

Йәйләүҙә мал аҫрау күп яҡтан ҡалмыҡтарҙыҡына оҡшаш. Иртән малдарҙы ҡыуып килтергәс, ҡолондарҙы һәм быҙауҙарҙы тирмәләргә яҡын ерҙә бауға бәйләп ҡуйып, көн буйына бер ниндәй аҙыҡһыҙ тоталар. Көн уртаһында тирмәләр тирәһенә башҡорттар төтөн ебәрә, күгәүендән ҡотолор өсөн малдар үҙҙәре ошонда килә; ҡолондар кешнәүенә, быҙауҙар баҡырыуына ҡарамаҫтан, уларҙың инәләре яҡын килмәй; әгәр ҙә уларҙан балаһына яҡынлашырға тырышыусылары табылһа, ҡолондарҙың моронона төпһөҙ тоҡ кейҙереп ҡуялар, ә унының ҡолондоң алғы иренен ҡаплап торған яғы оҙонораҡ була. Бына ошо бер эшкә ярамаған машина ҡолондарға инәләрен имергә ҡамасаулай.

Кискә табан уларҙың малдары билдәле бер ваҡытта шулай уҡ үҙҙәре тирмәләр янына ҡайта; әммә бейә, башҡорт ҡатыны уға ҡороҡ кейҙереп, ҡолон эргәһенә алып килмәйенсә, балаһы янына бармай; был осраҡта ла уға инәһенең бер имсәген генә алырға ирек бирәләр, быныһы ла, күрәһең, елендәге һөт имсәктәргә төшһөн өсөн генә эшләнә. Башҡорт ҡатындары ҡымыҙ бешер өсөн бейә һөтөн бөткәнсе һауып алып, буш еленле бейәләрҙе ҡолондары менән төнгөлөккә ебәрә. Һыйырҙарҙы ла шул тәртиптә һауалар. Был башҡорт ҡатындарының йәйләүҙәге төп эше булып тора. Ә башҡорт ирҙәре был саҡта ҡымыҙ һемереүҙән, йәиһә туғайҙарҙа ваҡыты-ваҡыты менән малдарҙы ҡарап килеүҙән башҡа бер нәмәне лә бар тип белмәй.

**(Дауамы бар).**

ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ



# СӘЙЕТГӘРӘЙ МАҒАЗОВ

**Сәйетгәрәй Сәйетйәғәфәр улы Мағазов - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе, шағир, Башҡорт хөкүмәте ағзаһы, Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше. Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенең (хәҙерге Ҡурған өлкәһенең Әлмән районы) Аҫҡар ауылында тыуған. Унының революцияға тиклемге тормошо хаҡында мәғлүмәттәр юҡ.**

Сәйетгәрәй Мағазовтың исеме Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте документтарында 1918 йылдың йәйенән күренә башлай. Әммә 1917 йылда Башҡорт ҡоролтайҙарында ҡатнашҡан булһа кәрәк. 1918 йылдың июнендә Башҡорт хөкүмәте үҙенең төп иғтибарын милли армия төҙөүгә йүнәлтә. Ошо эштә Сәйетгәрәй Мағазов та әүҙем ҡатнаша, Башҡорт хәрби шураһының ағзаһы итеп алына. Милли хәрәкәт лидеры Зәки Вәлидиҙең яҡын ярҙамсыһы сифатында йөрөй. "Полк төҙөй башлауыбыҙға бер аҙна ваҡыт үткәндер. Екатеринбург яғында Арғаяш кантонында большевиктарҙы ҡыуып сығарырға тотонған чехтарға ярҙамға кире батальон ебәрҙек. Был ғәскәрҙең хәрәкәте хаҡында тәүге хәбәрҙәр алғандың иртәгәһенә, беҙ Сәйетгәрәй Мағазов менән бергә, чех офицеры йөрөткән автомобилгә ултырып, Силәбенән сығып киттек. Көҙәш тигән ерҙә бик ҡаты бәрелеш булды. Сәйетгәрәй менән, винтовкалар тотоп, һуғышта ҡатнаштыҡ", - тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

1919 йылдың июль башында Башҡорт хөкүмәте Омскиҙағы Ваҡытлы Себер хөкүмәте һәм Себер армияһы командалығы менән һөйләшеүҙәр башлай. Тәүҙә Омскиға башҡорт офицеры Ғәбделхаҡ Ғәбитов ебәрелә. Артабан был һөйләшеүҙәрҙә Зәки Вәлиди менән Сәйетгәрәй Мағазов та ҡатнаша. "Бер нисә көндән һуң Сәйетгәрәй Мағазов менән бергә Омскиға үҙем килдем... Гришин-Алмазовты (хөкүмәт рәйесе - А. Я.) шул көндө күрҙек, башҡорт полктары стратегия яғынан мөһим урын биләү арҡаһында, уларҙы Себер хөкүмәтенең баш командалығына тура буйһондороу хаҡында килештек, башҡа талаптарыбыҙҙы ла ҡәнәғәтләндерҙе", - тип яҙа Вәлиди. Сәйетгәрәй Мағазов Омскиҙан тура Семипалатинск ҡалаһына юллана. Бында ул 18-21 июлдә йыйылышта ҡатнаша, ҡаҙаҡтарҙың Алаш Урҙа һәм Төркөстан хөкүмәте етәкселәре менән осрашып, бергә эш итеү тураһында һүҙ ҡуйыша. "Ҡаҙаҡ һөйләшендә бик матур шиғырҙар яҙа белгән Сәйетгәрәй Мағаз Ҡаҙағстан үҙәгендә ҙур хөрмәт ҡаҙанған, "Алаш Урҙа" исемле гәзиттәрендә минең хаҡта, башҡорт хәрәкәте тураһында маҡтау мәҡәләләре...", - ти Вәлиди.

Ҡаҙағстандан ҡайтыу менән С. Мағазов Башҡорт хөкүмәтенең уполномоченныйы сифатында Силәбе, Верхнеуральск һәм Златоуст өйәҙҙәрендә башҡорт отрядтарын ойоштороуҙа ҡатнаша. Артабан 1918 йылдың авгусында Башҡорт хәрби шураһы комиссияһы составында Башҡорт армияһының униформаһын эшләүҙә ҡатнашлыҡ итә. 1918 йылдың октябренән Сәйетгәрәй Мағазов Башҡорт ғәскәри идаралығында, Зәки Вәлиди янында хеҙмәт итә.

1919 йылдың февралендә, Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, I Бөтә Башҡорт хәрби съезында Башҡортостандың революцион хөкүмәте - Башревком ағзаһы итеп һайлана. Февраль айынан Башревкомдың агитация-мәғлүмәт бүлеге мөдире булып эшләй. Артабан 1919 йылдың майынан көҙөнә тиклем Мәскәүҙә Я. М. Свердлов исемендәге Коммунистик университетта уҡып ҡайта. Башревкомдың мәғлүмәт бүлегенә етәкселек итә. 1920 йылдың мартынан Сәйетгәрәй Мағазов Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссариатының Сәйәси-ағартыу идаралығын етәкләй.

1920 йылдың 19 майындағы декреты менән Үҙәк Совет хөкүмәте Башҡорт республикаһының автономия хоҡуҡтарын ҡырҡа сикләй. Зәки Вәлиди (был ваҡытта ул Мәскәүгә саҡыртып алынған була) артабанғы көрәште дауам итеү өсөн, Башревком ағзаларына эште ташлап, Төркөстанға китергә кәңәш итә. 1920 йылдың июнь уртаһында башҡорт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән Сәйетгәрәй Мағазов та, Стәрлетамаҡтан сығып китә. Башревком ағзаларының ҡаланан китеүен күптәр белмәй ҙә ҡала.

Башҡорт эшмәкәрҙәре 17 июндә Бөрйән-Түңгәүер кантонының Яңы Усман ауылында осрашып, Төркөстанға сығып китергә ҡарар ҡыла. Сәйетгәрәй Мағазов И. Исхаҡов, Н. Таһиров, Ф. Сөләймәнов, Т. Ғисмәтуллиндар менән бергә Ташкентҡа юллана. "Ҡаҙағстандан килгән башҡорт зыялылары араһында Сәйетгәрәй Мағазов та булды. Улар бөтә үҙәк Ҡаҙағстанды гиҙеп сығып, дуҫтарыбыҙ менән бәйләнеш урынлаштырған", - тип яҙа Вәлиди. 1921 йылдың июнендә Төркөстандағы милли хәрәкәт уңышһыҙлыҡҡа осрағас, башҡорт эшмәкәрҙәре, Харис Йомағолов менән бәйләнешкә инеп, властарҙан ризалыҡ алып, Башҡортостанға ҡайтырға сыға. Сәйетгәрәй Мағазов ауырып китеү сәбәпле, Ташкент ҡалаһында ҡала. Һуңыраҡ Башпомгол делегацияһы менән республикаға юллана. Юлда вафат булып, Кинель ҡалаһында ерләнә.

Сәйетгәрәй Сәйетйәғәфәр улы Мағазов шиғри күңелле, ижадҡа маһир шәхестәрҙең береһе була. 1918 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә бағышланған, башҡорт ғәскәрҙәренең ҡаһарманлығын данлаған шиғыр һәм дастандар ижад итә. "Әммә был әҫәрҙәрҙең күбеһе баҫылып сыҡманы. Барыһы ла Советтар тарафынан юҡ ителде", - тип яҙа Зәки Вәлиди.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

***✓ Математиканы яҡшы белеүсе кеше бөтөнләй икенсе йүнәлеш буйынса китһә лә, үҙенең һайлаған һөнәре буйынса башҡаларға ҡарағанда күберәк уңышҡа өлгәшә ала.***

**Математика фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусыһы Гөлназ Райманова Сибай ҡалаһында тыуып үҫкән. Әсәһе - Зәһүрә Дәүләтша ҡыҙы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, атаһы - Ҡорбанғәле Хөсәйен улы отставкалағы офицер, Ленинградта Можайский исемендәге хәрби академия тамамлаған. Һәр бер башҡорт ғаиләһендәге кеүек, Гөлназдың ата-әсәһе лә, үҫеп еткәс, ҡыҙҙары танылған кеше, кәмендә артист булыр, тип хыялланғандарҙыр инде, һәр хәлдә, ҡыҙҙарына ошондай йүнәлеш бирә улар. Гөлназ бәләкәй сағынан бейеү түңәрәгенә лә йөрөй, матур итеп сигергә лә, саф башҡортса һөйләшергә лә өйрәнә. Ҡыҙ 9-сы Сибай лицейының етенсе синыфында уҡығанда математиктар синыфы йыялар. Унда уҡыр өсөн ата-әсәһенең ғаризаһы кәрәк була. Гөлназ мәктәпкә барғас, ата-әсәһе исеменән ғариза яҙып, әсәһенең ҡултамғаһын ҡуйып, математика синыфында уҡый башлай.**

**Буласаҡ фән кандидаты урта мәктәпте тамамлағандан һуң Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтына математика факультетына уҡырға инә. Юғары уҡыу йортон тамамлағас, Өфөгә килә һәм математика фәне буйынса аспирантураға уҡырға инә һәм ике йыл элек кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай. Диссертация темаһы ла бик ҡыҙыҡлы: "Туберкулез ауырыуын профилактикалағанда һәм дауалағанда медицина страховка мәсьәләләренең математик модуле". Әлеге ваҡытта Гөлназ БДУ-ның математика факультетында эшләп йөрөй. Математиктар теүәл, аныҡ кешеләр, улар хыялға һәм фаразға бирелергә яратмай, тип әйтһәләр ҙә, Гөлназ менән осрашып һөйләшкәндән һуң был фекерҙең дөрөҫ булмауын да аңланым. Математиктар беҙҙең кеүек кешеләр икән, тик бына донъя, тормош тураһында фекер йөрөтөүҙәре үҙенсәлекле. Ышанмаһағыҙ, Гөлназдың үҙенә һүҙ бирәйек.**

# МИЛЛӘТЕБЕҘ

## математика фәненә

### Математиктар һирәк яңылыша

Математиканы теүәл фәндәр рәтенә индерһәләр ҙә, ул иң беренсе нәүбәттә логика фәне. Филологтар образдар менән фекер йөрөтһә, кинәйәләр менән эш итһә, математиктар логикаға таяна. Математика - фекер үҫеше фәне. Ни өсөнмө? Булмаһа, аңлатып китәйек. Әйтәйек, һин ял көнө иртәнсәк йоҡондан уяндың, алдыңда ял итеүҙең бер нисә ысулы бар:

- алырлыҡ әйберең булмаһа ла, магазиндар буйлап ҡыҙырыу, кәлеп һалыу йә булмаһа көнө буйына диванда ятып, телевизор ҡарау, икенсе төрлө итеп әйткәндә - эт һуғарыу;
- яҡын кешең менән осрашыу, уның менән йә әхиәрәтең менән киноға йә театрға барыу;
- компьютерҙа яңы программа үҙләштереү, үҙеңә кәрәкле мәғлүмәттәр эҙләү;
- китапханала ултырыу, әҙәби йә махсус әҙәбиәт уҡыу, архивтарҙа төрлө сығанаҡтар эҙләү;
- спортзалда шөғөлләнеү, һыу инергә, балыҡҡа, баҡсаға, емеш-еләккә, һунарға барыу;
- ғилми эш яҙыу, ғилми эшеңә ҡағылған әҙәбиәт менән танышыу, коллегаларың менән осрашыу;
- ижтимағи ойошманың ултырышына барыу, һ.б.

Был осраҡта математик үҙенә иң кәрәкле, күберәк файҙа килтерерлек оптималь юлды һайлауы менән гуманитарийҙарҙан айырылып тора. Гуманитарий балыҡҡа китһә, математик китапханаға йә берәй лекция тыңларға бара. Гуманитар өлкә кешеләре иң тәүҙә йөрәген, күңелен тыңлаусан. Кешене йөрәге, күңеле алдамайҙыр, әммә бында ҡара иҫәпкә, һалҡын аҡылға урын юҡ. Ошо күҙлектән ҡарағанда, тормошта математиктар һирәк яңылыша, тип уйлайым. Был бигерәк тә һөнәр, тормош юлдашы һайлағанда күренә. Гуманитарийҙы күберәк тойғо, математикты иҫәп йөрөтә.

### Математик етәксе

Һәр бер кешенең әҙ булһа ла математиканы белеүе мотлаҡ. Дөйөм урта белем биреү программаһына ла был фән юҡҡа ғына ҡуйылмағандыр. Математика нигеҙҙәрен тәбиғәт фәндәре вәкилдәре лә белергә тейеш. Кемдер берәү: "Мин математиканы аҡса һанау кимәлендә белһәм, шул еткән", - тип әйтә икән, ул төптө яңылыша. Башта әйткәнебеҙсә, математика тормошонда хаталанмаҫ өсөн, дөрөҫ юл һайлау өсөн дә кәрәк. Математиканы яҡшы белеүсе кеше бөтөнләй икенсе йүнәлеш буйынса китһә лә, үҙенең һайлаған һөнәре буйынса башҡаларға ҡарағанда күберәк уңышҡа өлгәшә ала. Ғөмүмән, математика һәр өлкәлә дөрөҫ логика ҡора белеү өсөн кәрәк. Мәҫәлән, етәксе кеше математик, йә булмаһа, математиканы яҡшы белә икән, ти. Ул коллективы алдына ҡуйылған бурыстарҙың иң мөһимдәрен айырып алып, уларҙы тормошҡа ашырырға тырышасаҡ. Әгәр ҙә коллективта ошо принцип һаҡланмаһа, йәғни математик фекерләүгә эйә булмаған етәксе коллективының иң алдынғы көстәрен, маҡсаттарын һәм уға өлгәшеү ысулдарын билдәләй алмаһа, эш алға бармаясаҡ. Математик аңы булмаған етәксенең коллективы берҙәм дә була алмайҙыр, тием. Математик етәксе - ул күп төрлө варианттар, ысулдар, сифаттар араһында иң мөһимен билдәләй алыусы кеше. Ә инде барыһының араһында иң мөһимен билдәләй алыусы етәксе быға тик математик фекерләү аша ғына килә ала. Ни өсөн беҙҙең илебеҙ алға китә алмай, һаман да бер урында тапана? Сөнки уның менән "өс тауыҡ та көтөп ҡарамағандар" етәкселек итә. Илебеҙ дөрөҫ юлдан барһын өсөн уның башында фәҡәт, мотлаҡ рәүештә математик фекергә эйә етәкселәр торорға тейешлеген аксиома тип атаһаҡ та була хәҙер. Беҙҙең алда бик күп юлдар бар. Әйтәйек, техник прогресс, модернизация, интеграция, конкурентлы булыуға ынтылыу, капитализм, коммунизм, көйләнеүсе социализм, дин һәм башҡа юлдар. Әгәр ҙә кешелек үҙенең киләсәген гуманлы мөнәсәбәттәргә ҡоролған етеш йәшәү шарттарындағы ил итеп күрергә теләй икән, юғарылағы юлдарҙың иң мөһиме ҡайһыһы булырға тейеш һуң? Быны, әлбиттә, өс тауыҡ та көтөп ҡарамаған кеше башҡара алмай.

### Ихтималлылыҡ, законлыҡ…

Мин II, III, IV курс студенттарына "Ихтималлылыҡ теорияһы", "Осраҡлы процестар теорияһы" буйынса лекциялар уҡыйым. Философияла "Осраҡлылыҡ" һәм "Законлылыҡ" категориялары бар. Ошо уңайҙан шундайыраҡ һорау тыуа: һәр бер законлы күренеш осраҡлы булыуы бар, ә бына һәр бер осраҡлылыҡ законлы була аламы? Быны математика фәненә таянып ҡына иҫбат итеп булалыр. Әйтәйек, "Салауат Юлаев" хоккей командаһы континенталь регуляр чемпионатта очколар буйынса еңеп, 1-се урынға сыҡһа ла, плей-офф уйындарында 3-сө урынға ҡалды. Тимәк, команда "Ихтималлылыҡ теорияһы" буйынса еңеүсе булһа ла, осраҡлылыҡ арҡаһындамы, әллә законлы рәүештәме, плей-оффта алғы рәткә сыға алманы. Хоккей уйынында ғына түгел, ғөмүмән, тормоштағы һәр бер күренешкә ошо закондар күҙлегенән баһа бирергә, ҡыҙыҡлы һығымталар яһарға була.

Ошо юл менән тормоштағы һәр күренештең, ваҡиғаның төрлө нюанстарын, плюстарын, минустарын Ньютон кеүек иҫәпләп сығып, иртәгә, иртәнән һуң, яңынан 10, 20, 30 йылдан нимәләр булырын иҫәпләп сығарырға булалыр. Әйтәйек, шул уҡ Ньютон математик һәм физик формулалар, теориялар нигеҙендә ахырызамандың 2060 йылда буласағын әйткән. Әммә осраҡлы күренеш-хәлдәрҙе бер Хоҙай ғына белә, тиҙәр. Шуға күрә лә беҙ ниндәйҙер формулалар, гипотезалар ярҙамында ниндәйҙер күрәҙәлектәр ҡылһаҡ та, хатта иртәгә үҙебеҙ менән ни булырын да әйтә алмайбыҙ. Мин алдағы көндәремә план төҙөп, маҡсаттар ғына билдәләй алам, тик шундай-шундай хәл-ваҡиғаларҙың аныҡ булыуын йә булмауын әйтеү мөмкин түгел. Сөнки миңә бәйләнмәгән факторҙар, икенсе кешеләрҙең маҡсаттары, пландары минекен емерергә лә мөмкин. Ҡайһы бер кешеләр алдағы көндәренә планды минуты-секунды менән төҙөй ҙә, блокнотына ҡарап, шуны үтәргә тырыша. Ҡаршыларына осраҡлы рәүештә 30-40 йыл күрмәгән дуҫтары, туғандары килеп осраһа: "Ғәфү ит, минең ваҡытым юҡ", - тип китеп барыусылар ҙа бар. Бындай режим менән көнитмеш барыбер кешелеклелек, гуманлылыҡ принциптарына ҡаршы килә.

### "Өфө ауырыуы"

Өфөгә мин 2006 йылда килдем, тәүҙә ҡыйыныраҡ ине. "Әллә кире Сибайыма ҡайтып китергә лә барырға инде?" тип уйланған саҡтарым да булманы түгел, булды. Ярай әле, атай-әсәйем фатир һатып алып биреп, минең Өфөләге иң ҙур мәсьәләмде хәл итте. Рәхмәт уларға. Баш ҡалаға тиҙ өйрәндем, хәҙер инде Сибайға ҡайтып, 2-3 көн үтеүгә, Өфөнө һағынып өлгөрәм. Дөрөҫөн әйткәндә, мин хәҙер "Өфө ауырыуы" менән ауырыйымдыр ул. Математик булараҡ, мин Өфөнөң кешеләрҙе тартыу көсөн унда матур урындарҙың, ял, хеҙмәт, мәҙәниәт, сәнғәт объекттарының күп һәм төрлө-төрлө булыуында күрәм. Йәнең теләгән урынға барырға, аралашырға, зауыҡланырға була был ҡалала. Ә Сибайҙың бер осонан икенсе осона 15-20 минут эсендә йәйәүләп үтергә була, ундағы мөмкинлектәр ҙә шулай уҡ сикле. Шулай ҙа Сибай күңелемә сабый, бала, үҫмер сағым иле, атай йорто ҡалаһы булараҡ яҡын. Сабый, бала сағыма ҡайтып булмаған кеүек, унда ла ҡайтып эшләү ана шул саҡтарымды иҫкә алыу һымаҡ ҡына булыр ине. Өфөнөң дә оҡшамаған яғы бар - атай-әсәйем бында түгел.

### Иң дөрөҫ юл

Кеше донъяға тыуа, уҡый, белем ала, күңеле ятҡан һөнәргә эйә була, хеҙмәт итә, өйләнә йә кейәүгә сыға, балалар тәрбиәләп үҫтерә, пенсияға сыға, балаларын башлыкүҙле итә, ейән-ейәнсәрҙәр ҡарай, берҙән-бер көн донъялыҡ менән хушлаша... Уның балалары ла донъяға тыуа, уҡый, белем ала, күңеле ятҡан һөнәргә эйә була... Йәғни балалар ҙа ата-әсәһе юлын ҡабатлап, бер мәл донъялыҡ менән хушлаша, артабан уларҙың да балаларын шундай уҡ юл көтә... Фәҡәт ошо сылбырҙа, йәғни геометрик прогрессияла ҡараһаң, йәшәүҙең мәғәнәһе бөтөнләй юҡ һымаҡ. Бәй, улай булғас, балаларын һәм ейән-ейәнсәрҙәрен, бүләбүләсәрҙәрен шундай уҡ яҙмыш көткәс, ниңә кеше уларҙы донъяға тыуҙыра һәм үҙе лә ниңә йәшәй һуң? Донъяға тыуыуын тыуғас, йәшәүҙең иң дөрөҫ юлы нимәлә һуң? Бик

***Аллаһы Тәғәлә кешелекте яралтҡан икән, беҙ уның мәңгелеген тәьмин итер өсөн, сылбырҙы өҙмәҫ өсөн үҙебеҙҙең эстафетаны лайыҡлы рәүештә үтергә бурыслыбыҙҙыр. Киләһе быуындарға тапшырыр өсөн. Беҙгә, башҡорттарға, мәҫәлән, милләт эстафетаһын киләсәккә тапшырыу бурысы йөкмәтелгән. Әгәр ҙә беҙ мираҫ хоҡуғын киләсәктә үҙебеҙҙең милләт вәкиленә тапшыра алмайбыҙ икән, йәшәүебеҙҙең мәғәнәһе юҡҡа сыға, тигән һүҙ. Үҙ ырыуыңдың, атай-олатайҙарыңдың, милләтеңдең ҡанын, рухын киләсәккә тапшырыуҙың яуаплылығы дөйөм кешелектекенә ҡарағанда һәлмәгерәк. Кем белә, бәлки, кешелек сылбыры өҙөлмәһен өсөн дә Аллаһы Тәғәлә милләттәрҙе барлыҡҡа килтергәндер.***

***✓ Кеше үҙен әллә кемгә ҡуйып, маһайып йөрөй башлаһа, ситтән ҡарап, был күренешкә ниндәй баһа бирергә була инде? Тәкәбберлекте шуға күрә лә кеше үлтереүгә тиң иң ҙур гонаһҡа тиңләйҙәрҙер инде...***



ҡатмарлы һәм ябай ғына һорауҙар. Йәшәр өсөн тыуғас, кеше йәшәй инде, тип был һорауҙарға анһат ҡына яуап та биреп булыр һымаҡ. Улайһа, кеше бит йәшәр өсөн тип тыумай, уны бит тыуҙыралар һәм йәшәргә мәжбүр итәләр түгелме? Йәшәү менән йәшәргә мәжбүр булыуҙың араһында ниндәй айырма бар һуң? Бында һорауҙарҙы бик күп итеп теҙергә мөмкин булыр ине. Әгәр ҙә әсәйем менән атайым осрашып өйләнешмәгән булһа, мин донъяға тыумаҫ инемме? Юҡ, мин донъяла йәшәгәс, барлығымды башҡалар белгәс, минең донъяла йәшәүем законлы һәм ул осраҡлы хәл түгел. Тимәк, һәр бер кешенең донъяла йәшәүе законлы тип табылғас, кешеләрҙең үҙе һымаҡ заттарҙы донъяға тыуҙырып йәшәүе кешелектең иң дөрөҫ юлы була ала. Әгәр ҙә Аллаһы Тәғәлә кешелекте яралтҡан икән, беҙ уның мәңгелеген тәьмин итер өсөн, сылбырҙы өҙмәҫ өсөн үҙебеҙҙең эстафетаны лайыҡлы рәүештә үтергә бурыслыбыҙҙыр. Килгән быуындарға тапшырыр өсөн. Беҙгә, башҡорттарға, мәҫәлән, милләт эстафетаһын киләсәккә тапшырыу бурысы йөкмәтелгән. Әгәр ҙә беҙ мираҫ хоҡуғын киләсәктә үҙебеҙҙең милләт вәкиленә тапшыра алмайбыҙ икән, йәшәүебеҙҙең мәғәнәһе юҡҡа сыға, тигән һүҙ. Үҙ ырыуыңдың, атай-олатайҙарыңдың, милләтеңдең ҡанын, рухын киләсәккә тапшырыуҙың яуаплылығы дөйөм кешелектекенә ҡарағанда һәлмәгерәк. Кем белә, бәлки, кешелек сылбыры өҙөлмәһен өсөн дә Аллаһы Тәғәлә милләттәрҙе барлыҡҡа килтергәндер.

донъяла иң алдынғыһы һаналды. Һәр яҡтан да камил булған шәхесте тәрбиәләү - ул уҡытыу-тәрбиә эшенә математика күҙлегенән ҡарай белеүгә бәйле. Хәҙер беҙҙә лә, Америкалағы кеүек, бакалавр, магистратура системаларын индерергә тырышалар. Минеңсә, былар беҙҙең илдә йәшәүселәрҙең менталитетына тура килеп бөтмәй. Рәсәй кешеһе һәр ваҡыт, ниндәй генә һөнәр эйәһе булмаһын, һәр өлкәлә лә камиллыҡҡа ынтыла. Беҙҙең юғары белем биреү системаһында 1-2-се курстарҙа дөйөм характерҙағы предметтар үтелеүе лә юҡҡа түгел. Урта мәктәптә, мәҫәлән, математика, алгебра, геометрия фәндәре уҡытыла. Урта мәктәпте тамамлағанда математика фәненең "Алгебра. Анализ башы" тип аталыуы ла юҡҡа ғына түгел. Тимәк, дөйөм белем биреүсе урта мәктәп баланы фекерләргә, анализ яһарға өйрәтә лә, оло донъяға осора, анализға башланғыс бирә. Әйтәйек, буласаҡ филолог, биолог йә химик йә философ өсөн нимәгә кәрәк ул математика? Аҡса иҫәпләр өсөн генәме? Алда әйткәнебеҙсә, математика логика фәне икән, урта мәктәптең өлкән синыфтарында йә юғары уҡыу йорттарының тәүге курстарында үтелгән математика артабан һәр өлкәлә системалы үҫеш өсөн нигеҙ ташын тәшкил итә. Математик философ бик күп төшөнсәләр, идеялар, категориялар, ҡанундар араһында иң мөһимен айырып өйрәнә, математик филолог күп төрлө ҡағиҙәләр, мәғәнәләр араһынан иң мөһимен билдәләй, математик химик күп төрлө матдәләр, теориялар, составтар араһынан иң-инен айырып ала, математик биолог...

асылы бигерәк тә мәҡәлдәрҙә, сәнғәтендә һәм мәҙәниәтендә сағыла. Әйтәйек, "Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ", "Йөҙ тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр барып күр", "Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын", "Бишектәге бишкә төрләнер", "Батыр бер үлер, ҡурҡаҡ мең үлер", "Һигеҙ һыйыр аҫырағансы, һимеҙ һыйыр аҫыра", "Берәү булһын, берәгәйле булһын", "Алтылағы алтмышта", "Алтмыш ҡолон ат булмаҫ", "Бер күктә ике ҡояш булмай", "Биштең башы булғансы, алтының аяғы була", "Берәү үлмәй - берәү көн күрмәй", "Мең башта мең аҡыл бар" һ.б. Беҙҙекеләр ниндәйҙер ҡарарға ҡапыл килмәй, оҙаҡ уйлап эш итә, тиҙ генә ниндәйҙер ҡылыҡ ҡыла һалмай. Был математик аң йөрөтөү, фекерләү күренеше сағылышы.

# ХОЛҠОНДА...

## хас һыҙаттар ята



***Башҡорттар араһында математиктар бик күп. Улай ғына ла түгел, милләтебеҙҙең холҡонда, фәлсәфәһендә, тарихында, йәшәйеш рәүешендә математика фәненә хас булған һыҙаттар шул тиклем күп. Башҡорттар йырға, ҡурайға, моңға, бейеүгә күберәк һәләтле, уларҙа донъя малына, байлыҡ туплау мәсьәләһенә вайымһыҙыраҡ ҡараш тойолһа ла, милләттең күңел, рух бөтөнлөгө аныҡ. Беҙҙең халыҡтың математик асылы бигерәк тә мәҡәлдәрҙә, сәнғәтендә һәм мәҙәниәтендә сағыла.***

Йыһандың сиге булмаған кеүек, һандарҙың да сиге юҡ. Ғәләмдең мәңгелеге, сикһеҙлеге күҙлегенән ҡарағанда, Ер шары үҙе лә "өф" тигәндә осоп китерлек саң бөртөгө ише лә түгел хатта. Ә кеше иһә ана шул саң бөртөгө молекулаһының молекулаһының молекулаһы ише лә түгел. Ана шул кеше үҙен әллә кемгә ҡуйып, күнел кирелегенә бирелеп, маһайып йөрөй башлаһа, ситтән ҡарап, был күренешкә ниндәй баһа бирергә була инде? Тәкәбберлекте шуға күрә лә кеше үлтереүгә тиң иң ҙур гонаһҡа тиңләйҙәрҙер инде...

### Математик философ...

Совет осорондағы беҙҙең урта һәм юғары белем биреү системаһы

### Ете ҡат үлсә...

Башҡорттар араһында математиктар бик күп. Улай ғына ла түгел, милләтебеҙҙең холҡонда, фәлсәфәһендә, тарихында, йәшәйеш рәүешендә математика фәненә хас булған һыҙаттар шул тиклем күп. Башҡорттар йырға, ҡурайға, моңға, бейеүгә күберәк һәләтле, уларҙа донъя малына, байлыҡ туплау мәсьәләһенә вайымһыҙыраҡ ҡараш тойолһа ла, милләттең күңел, рух бөтөнлөгө анығ. Беҙҙең халыҡтың математик

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Математиктар менән дә шулай ҡыҙыҡлы итеп әңгәмә ҡороп була икән. Ә бит Гөлназдың һүҙҙәрендә дөрөҫлөк бар: милләтебеҙ аҫылдары донъяның бихисап биҙәктәренән, тауыштарынан, нурҙарынан шундай аҫылдарын һайлап алып, уны сәнғәт һәм мәҙәниәт итеп нағышлап, беҙгә бай мираҫ ҡалдыра алған икән, был ғәмәлдәр ҙә математика фәненә бәйле. Шулай түгелме?**

Әхмәр ҮТӘБАЙ
яҙып алды.

ЙӘШТӘРГӘ ӘЙТӘМ...

# ВАҠЫТ ҠӘҘЕРЕ...

## һәм халыҡ аҡылы

**Был аҡылды мәктәп йылдарында әсәй ауыҙынан көн дә ишетергә тура килә ине. Теләйһеңме, юҡмы, бөтә эштәргә лә өлгөрөп, "елеп" йөрөлә торғайны. Ошо хаҡта бөгөн, әле саҡ икенсе курсты тамамлаған студент булараҡ, уйлап ултырам. "Бөгөн эшләй торған эшең иртәгәгә ҡалмаһын" тигән һүҙҙәр ҡолаҡ төбөндә яңғырап торһа ла, күп осраҡта ошоноң тап киреһен эшләп ҡуйыла. Ни өсөндәр, китапхана юлы ла йыш тапалмай хәҙер. Бер ҙур ғына сәбәбе, дөрөҫөрәге, һылтаныу бар: ваҡыт юҡ. Ваҡытыңды нисек дөрөҫ бүлергә өйрәнергә һуң?**

Ошо һорау өҫтөндә күп кенә уйлана торғас, аҡылды халыҡта таптым. Ата-бабаларыбыҙ тәрән мәғәнәле әллә күпме аҡыл мираҫы ҡалдырған бит. Тик беҙ аҡылды һәр саҡ ситтән эҙләргә күнеккәнбеҙ. Әле иҫкә төшөргән аҡыл барыһына ла таныш булһа ла, уны күптәребеҙ эштә ҡулланa белмәй. Шуға минең кеүек бар ергә лә һуңлап йөрөүселәрҙе ошо аҡыл менән таныштырырға булдым әле.

Беренсе ҡағиҙә: кис ятыр алдынан иртәгә нимә эшләрендә ҡағыҙға теркәп ҡуй, сәғәтен дә билдәләргә онотма. Ваҡытыңды алдан ашығыс килеп тыуған эштәрҙе атҡарыу өсөн уңайлы итеп бүл.

Икенсе ҡағиҙә: кисә үк яҙып әҙерләгән ҡағыҙыңды ҡарап сыҡ. Эштәреңде, тиҙ бөтөрәм, тип ашығып башҡарма. Барыһын да еренә еткереп эшлә. "Ҡабалан эшкә аҡыл эйәрмәй", "Ашыҡҡан ашҡа бешкән", тигәнде онотма.

Өсөнсө ҡағиҙә: дәрестәреңде уҡыуҙан ҡайтып, ашап алғас, бер ярты сәғәт ял иткәндән һуң уҡыу залына төшөп әҙерләргә күнек. Ни тиһәң дә, булмәләштәр менән гәп һатырға бөтәһе лә ярата, ә һиңә был зыян килтерәсәк. Онотма: "Бер көн артта ҡалһаң, биш көн йүгерерһең", "Бөгөн эшләй торған эшеңде иртәгәгә ҡалдырма", "Ҡалған эшкә ҡар яуыр".

Дүртенсе ҡағиҙә: бер башлаған эшеңде ташлап, икенсеһенә тотонма. Шундай аҡыл бирә халыҡ: "Китәр ҡыҙҙың киткәне яҡшы, бөтәр эштең бөткәне яҡшы", "Башланған эштең бөткәне яҡшы", "Бер эшкә бәйләнгәс, биленде бушатма".

Бишенсе ҡағиҙә: мөһим эште ауыр булһа ла артҡа ҡалдырма, әммә бар ваҡытыңды уға сарыф итергә лә тырышма. Онотма: "Иртәгә ҡалған эшең - һынып төшкән тешең", "Ваҡытлы эш ваҡытында яҡшы", "Сананды - йәй, арбаңды ҡыш әҙерлә", "Бер эшлә, берәгәйле эшлә".

Алтынсы ҡағиҙә: кис көнө атҡарған эштәреңә йомғаҡ яһап, ҡағыҙыңда билдәләргә онотма. Әммә башҡарылған эштәреңде генә теркә. Өлгөрмәһән, артыҡ бошонма, ярар әле, тип ҡул да һелтәп ҡуйма.

"Алтын бөртөкләп йыйыла", "Себеште көҙ һанайҙар" икәнен иҫеңдән сығарма.

Етенсе ҡағиҙә: эш тип йөрөп, ял итергә онотоп ҡуйма. Ҡағыҙыңда теркәлгән барлыҡ эштәреңде тамамлағас та үҙеңә ял ойоштор. Иртә ятып йоҡларға тырыш. Сөнки: "Батырға ла ял кәрәк", "Ял - ат түгел, ялы юҡ, ял итмәһәң - яйы юҡ".

Һәм тағы ла халыҡ аҡылына ҡолаҡ һалырҙай бер нисә мәҡәл: "Иртә торған бай булған, һуңлап торған хур булған", "Эшеңде эш иткәс кенә маҡтан", "Эшләгән моратына етер, эшләмәгәндең ғүмере бушҡа үтер".

Мәҡәлдәр бигерәк тә студент кешегә файҙалы. Уҡыйым, тип килеп, ваҡытын бүлә белмәгәнлектән, ни уҡымай, ни эшләмәй йөрөүселәр күп. Бигерәк тә егеттәр араһында. Сөнки улар атай-әсәйҙең гел киҫәтеп тороуына һалышҡан, һаманға тиклем үҙ аллы тормошҡа күнегеп етә алмай яфаланалар. Ундайҙарға: "Әрме хеҙмәтен үтәп, бер аҙ быуын нығытһаң, аҡыл ултыртһаң, яҡшыраҡ булыр," - тип кәңәш биреп ҡуйыуҙары ла мөмкин бит әле. "Уҡыу- энә менән ҡойо ҡаҙыу", тиһәләр ҙә боронғолар, ҡойоно ҡаҙып бөтөп, моратыңа ирешкәс, саф белем шишмәһенән эсеп кинәнерендә лә иҫтән сығармау кәрәктер.

Камила ҒӘЛИЕВА.

***✓ Кисә генә кәләшен яҡлашыр өсөн дошманына ҡыйғыр бөркөттәй ташланырға әҙер үткер ҡарашлы, етеҙ, дәрте ташып торған ире ҡартайып киткәндәй. Ҡыланыштары, үҙен тотошо бабайҙарға оҡшап ҡалған.***




Бына ҡәйнәһе өйгә инде. Ҡулын йыуҙы. Шалтыр-шолтор килеп бактан сәйнүккә һыу ҡойҙо. Кисә һыу индермәне Резеда. Ғәҙәттә кистән ташып ҡуя торғайны. Тиҙҙән сәйнүктең шыжлағаны ишетелде. Шкафтан әйберҙәр алып, сәй ултырта башланы. Илһам инде. Ҡулын йыуҙы. Тауыш-тын бөттө. Һөйләшмәйҙәр. Иртән өй эсе бигерәк тә гөрләп тора торғайны, ғәжәп, бөгөн ғүмерҙә булмағанса тын. Шулай ҙа, ниңә Илһам уның янына һаман инмәй? Резеда түҙемһеҙләнә башланы. Ҡулын йыуғас та хәлен белергә тейеш ине лә баһа? Кисә мунсаның ишеге бикле булғанға үс итеп, Сәйет эште боҙоп ҡуйғанмы әллә? Ул мотлаҡ килгән булырға тейеш. Сөнки ҡат-ҡат киҫәтте бит. Резеда бөгөн иртән бармағас, йәне көйөп, берәй нәмә ҡылып та ҡуйырға мөмкин. Резеданы ҡурҡыу алды. Ҡабырғаһына әйләнеп ятты ла юрғанын башы аша бөркәнде. Ошолай ғына бөтөн булған проблемаларындан ҡасып ҡотолоп булһа икән?! Юрған аҫтында ла әлеге уйҙары тынғы бирмәне. Башы яңынан сеңкеп ауыртырға тотондо.

Кухняла ултырған иренең һәр ҡыланышын күҙ алдына килтереп, йөрәге һыҙланы. Инһен ине Резеда янына, әрләһен, сәсенән һөйрәтеп йөрөп туҡмаһын ине! Өнһөҙлөгө менән бәгерен өҙҙө ул ҡатынының. Билдәһеҙлектән дә ауырыраҡ нәмә юҡтыр!

Өйҙәге тынлыҡты боҙоп, телефон шылтыраны. Уның тауышына терт итеп ҡалды. Кем булыр? Үс иткәндәй, оҙаҡ ҡына береһе лә алмай торҙо. Ниһайәт, ҡәйнәһенең "Эйе, тыңлайым" тигәне ишетелде. Теге башта өндәшмәйҙәр ине булһа кәрәк, бер һүҙҙе әллә нисә тапҡыр ҡабатлағандан һуң, йән асыуына трубканы һалып ҡуйҙы. Сәйет кенә булды был. Резеданы юғалтҡандыр. Юҡ, бармаясаҡ ул бөгөн. Резеда йән әрнеүен баҫыр өсөн, юрғанының осон бар көсөнә тешләп тартырға тотондо. Нимә булһа ла булыр, яҙмышын Хоҙай ҡулына тапшырып, тик ятасаҡ бына шулай.

Илһамдың ауыр аҙымдары ишетелде. Был яҡҡа килә! Резеда тулҡынланыуҙан тын алырға ла онотто. Күкрәк тәңгәле әсетә башлағас ҡына ауыр итеп тын алды. Ни тиер? Резеданың үҙенә ни эшләргә? Ул йәһәт кенә тороп ултырҙы. Тубыҡтарын юрғаны менән ҡапланы. Әйтерһең, юрған уның һаҡсыһы, ул булғанда Резедаға ҡурҡыныс янамай. Килеп ингәс тә, Илһам күҙҙәрен иҙәнгә йүнәлтте. Ҡатынының ялбарыулы, меҫкен ҡарашын күтәрә алманы. Бер ни өндәшмәй, кейем шкафын асты, аҫҡы тартмаһын алға һөйрәп сығарҙы ла нимәлер эҙләй башланы. Үҙе һыу уртлағандай, ләм-мим.

- Илһам, берәй нәмә булдымы әллә? - Резеда ипләп кенә өндәште, бер нәмә лә белмәгәнгә һалышты.

Илһам, эҙләнеүенән туҡтап, ялп итеп кәләшенә әйләнде. Бер ни аңлатмаған, мәғәнәһеҙ ҡарашы менән тексәйеп торғандан һуң:

- Уны мин һинән һорарға тейеш, - тине лә, яңынан үҙ эшенә тотондо. Бер төн эсендә ни тиклем үҙгәреш! Кисә генә кәләшен яҡлашыр өсөн дошманына ҡыйғыр бөркөттәй ташланырға әҙер үткер ҡарашлы, етеҙ, дәрте ташып торған ире ҡартайып киткәндәй. Ҡыланыштары, үҙен тотошо бабайҙарға оҡшап ҡалған.

- Нимәне, Илһам? Бәлки, аңлатырһың?

Уның һүҙҙәрен, әйтерһең, ишетмәй ҙә. Резеданы бар тип тә белмәй. Шулай уҡ барыһы ла бөттөмө икән ни? Ғәфү итмәҫме?

Кәрәкле әйберен тапҡас, Илһам сыға башланы. Резеда саҡта башына йүнле генә уй килмәйәсәк. Ә уның алдына артабанғы тормошон хәл итеү мәсьәләһе килеп баҫты. 30 йәшенә етеп, тәүге тапҡыр ғашиҡ булғайны бит ул! Ә уныһы торғаны менән бер йылан булып сыҡты. Уйнаш итә-итә ирҙәрҙе арбау серенә өйрәнеп бөткәндер инде. Ә Динә? Ниңә ул мыҫҡыл итте Илһамды? Яҡшы мөнәсәбәттә инеләр бит һуң. Килешмәһәләр, берәй нәмәне бүлешә алмаһалар, үс ала, тип әйтер инең. Ә былай... Юҡ, йәшәй алмаясаҡ ул кәләше менән. Күҙ алдынан Илһамға мәй ине, бөгөн... Йөрәкте өҙөп, тағы телефон шылтыраны. Быныһында ҡәйнәһе шунда уҡ алды: "Эйе, тыңлайым". Теге башта нимә тигәндәрҙер, Миңзифа трубканы тотоп, Резеда янына килеп инде.

- Мә! Һөйәркәң!

Тауышында ни тиклем нәфрәт! Туғанын үлтергәнме ни Резеда. Телефонды алды ла, бер ни өндәшмәй, кире һалды. Сәйетте, мөмкин булһа, өҙгөсләп ташларға әҙер ине ул. Талапсан тауыш менән телефон яңынан шылтыраны. Резеда йәнә һүндерҙе. Түҙмәне, иҙәнгә һеләүһен етеҙлеге менән һикереп төштө лә, иренең аяғынан ҡосаҡлап, иҙәнгә йығылды.

- Илһам, өндәшмәй-нитмәй сығып китмә улай. Зинһар! Миңә былай ҙа ауыр!

Илһам иҙәндә ултырған ҡатынына нәфрәт менән ҡараны. Резеданың ҡулдарынан арынырға тырышып, аяғын һелкте. Әммә Резеда ныҡ тотҡайны, тиҙ генә ебәрергә теләмәне.

- Һөйләш минең менән... Зинһар.

- Һине... һине күргем дә килмәй! Ебәр.

- Юҡ! - Резеда уның һайын Илһамдың аяҡтарына сат йәбеште.

- Һин тыңларға тейешһең. Хәҙер барыһын да аңлатам һиңә.

- Аңлаттылар инде, ыҙаламаһаң да була! Бөтөн ауыл һөйләгәндә нимәгә ваҡыт әрәм итергә?

Бер аҙға албырғап ҡалған Резеданың ҡулдары бушаүын тойоп, аяғын ҡапыл тартып алды. Резеда көүҙәһен тота алмай, артына йығылды. Шунан файҙаланып, Илһам шәп-шәп атлап сығып китте. Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙға бер генә тапҡыр ҙа ҡул күтәргәне юҡ, әммә енәйәттәр тап ошондай мәлдә ҡылыналыр, күрәһең. Илһам йөрәгенең дарҫлап тибеүен, мейеһенә ҡан йүгереүен тойҙо, үҙенән-үҙе йоҙроҡтары төйнәлде. Ҡыҙып китмәҫ өсөн гаражына инде, машинаһын тоҡандырҙы. Бер аҙҙан өйҙәгеләр машина тауышын ғына ишетеп ҡалды. Миңзифа апай артынан йүгереп сыҡһа ла, өлгөрмәне. Илһамдың туҡтарға ла, ҡайҙа киткәнен белдерергә лә теләге юҡ ине. Сөнки әлегә үҙе лә белмәне. Уға тынысланырға, үҙ хәленә ҡайтырға кәрәк, ә өйҙә был мөмкин түгел. Резедаһы янында тиклемге ирҙәре китмәйәсәк. Нисәү булды икән улар? Көнөнә берәү генә лә түгелдер бит инде. Көн һайын яңы, яңы, яңы... Илһамдың асыуҙан күҙ алдары ҡараңғылана башлағас, машинаһын туҡтатырға мәжбүр булды.

Башын руленә терәне лә, күҙҙәрен йомоп, өнһөҙ ҡалды. Күҙ алдында Резедаһының инәлеүле йөҙө. Кеше шул тиклем дә ике йөҙлө була ала икән дә! Ҡапыл эске бер тауыш: "Бәлки, ул дөрөҫтө әйтәлер, һин бит тыңламаның..." - тигәндәй булды. Илһам хатта башын ҡалҡытып, тирә-яғына ҡаранып алды, ысынлап та берәйһе өндәштеме әллә? Юҡ! Юха ул, юха! Өйрәнеп бөткән... Илһам, кәләше менән һөйләшмәгәнгә бер секундтай ғына үкенгәндәй итһә лә, йөрәге ярһыуҙан туҡтаманы.

Шул ваҡыт телефоны шылтыраны. Ынйыбикә апаһы!

- Эйе, тыңлайым, һөйлә, - тине Илһам ҡоро ғына.

- Иркәм, миңә һин, һинең ярҙамың кәрәк. Тиҙ генә килеп етә алмайһыңмы? - Тауышы төшөнкө, ышанысһыҙ сыҡты. - Бер кемгә лә бер нәмә лә өндәшмә, барыһын да үҙең килгәс аңлатырмын...

Илһам машинаһын тиҙ генә оло юлға борҙо ла баш ҡала яғына елдерҙе.

Резеда күпме ятҡандыр иҙәндә, иҫләмәй. Ни илай алманы ул, ни көлә алманы, һыны ҡатҡан килеш бер нөктәгә төбәлеп тик ятты. Донъя һүнде уның өсөн. Илһамһыҙ тормошоноң йәме юҡ.

Ҡәйнәһенең ҡыштыр-ҡыштыр нимәләрҙер эшләгәне, бүлмә буйлап йөрөгәне ишетелә, әммә юрамал ғына булһа ла Резеда ятҡан бүлмәнең ишеген асып та ҡарамай. Кисә генә нимә алып, нимә бирергә белмәй ине, бөгөн...

- Ниңә һөйләшмәйһең? Мин ҡамасаулайыммы әллә? - Резеданың ҡыланышы Миңзифаның йәнен генә көйҙөрҙө.

- Һөйләшкем килмәй.

- Эй, килен, килен! Мин бит һине өйөбөҙгә үҙемдең ҡыҙым кеүек ҡабул иткәйнем... - Миңзифа карауатҡа килеп ултырҙы ла, сеңләп илап ебәрҙе. Ул да күкрәгенә төйөн булып төйнәлгән йәшен нисек тышҡа сығарырға белмәйенсә йөрөй ине. - Ниңә улымды бәхетһеҙ иттең? Ни ғәйебе бар ине һуң уның? Әллә фәхишә икәнеңде береһе лә белмәҫ тип өмөтләнгәйнеңме? Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә ул. Бер ваҡытта ла көнөнә ҡырҡ ир аҫтына ятҡан фәхишә киленем булыр тип уйламағайным. Эй, Аллам, ниндәй гонаһтарым өсөн яҙалайһың икән?

Аһ, көнөнә ҡырҡ ир аҫтына... Сәйет шулай һөйләнеме икән ни? Үәт хайуан!

- Кем һөйләне һеҙгә уларҙың барыһын да?

- Кем ауыҙынан ишеткәнде кем генә иҫләһен инде! Бөтөн ауылға рисуай булдыҡ. Бөтөнөһөнөң телендә хәҙер беҙ генә.

Ҡәйнәһенә яуап итеп ни әйтергә белмәне Резеда. Аҡланып та ни тиһен? Уларҙың һүҙендә хаҡлыҡ бар - нимә генә тиһәң дә, теләк менәнме, түгелме, фәхишәлек менән шөғөлләнде, Сәйеттең ҡәҙерле ҡунаҡтарының күңелен күрҙе.

- Ҡәйнәм... - Резеда нимәлер аңлатырға тип ауыҙын аҫҡайны, ҡәйнәһе уҫал итеп:

- Өндәшмә, исмаһам! - тип ауыҙын япты. - Оялыр инең әҙерәк! Бына нимә, һин артабан был өйҙә ҡала алмайһың. Быны үҙең дә аңлап тораһыңдыр. Һөйәркәң дә тынғы бирмәй ана. Улай, ир менән дә, һөйәркәң менән дә рәхәт кенә йәшәп булмай ул.

- Һөйәркәм түгел ул минең!

- Ышанмайым. Кисә лә, Динәгә барам тигән булып, йөрөп ҡайттың түгелме? Етмәһә, ниндәйерәк спектакль уйнаның! Көләргә кешеһе генә юҡ ине. Илһам ҡайтҡансы сығып кит! Бер минут та тотҡом килмәй фәхишәне үҙ өйөмдә! Ярай әле, Ынйыбикә күҙҙе асты. Былай булһа, ҡуйыныбыҙҙа һаман йылан эйәләтеп ятыр инек, үҙебеҙҙән үҙебеҙ көлдөрөп!

Ынйыбикә, тиме? Тимәк, ел Өфөнән иҫә булып сыға? Уға Сәмиғулла йә Сәйет барыһын да һөйләгәндер инде? Нисек был турала уйламаған! Ынйыбикә апайҙың ире бик яҡшы белә бит Резеданы! Ниндәйҙер проблеманы яйлар өсөн Сәйет Резеданы Сәмиғулланың ҡуйынына ла һалғайны. Ах, хайуан! Ә Ынйыбикә апай? Ул ниңә тараҡан был хәбәрҙе? Ҡайтҡас, аңлашырҙар ине әле. Резеда туйҙа Илһамы һөйөүенең билдәһе тип бүләк иткән балдағын бер систе, бер кейҙе. Бынан ары уны йөрөтөргә хаҡы юҡ. Тимәк, ҡалдырырға тейеш. Ҙур ауырлыҡ менән балдағын тәҙрә төбөнә һалды. Илап танһығы ҡанғас, юл сумкаһын сығарып ултыртты. Шкафты асып, кейемдәрен алып карауатҡа ырғытты. Әйберҙәре күп түгел уның, бөкләп хитланманы, йомарлап-йомарлап тыҡты ла, сумкаһын ҡосаҡлап, уйға ҡалды. Инде ҡайҙа барырға? Сәйеткәме? Юҡ! Һәм тағы ла берҙе - юҡ! Үлтерһә, үлтерһен, әммә уға боролоп та ҡарамаясаҡ. Динәгә барырмы? Былай ҙа башына бәлә һалды бит инде. Хәҙер инде ҡәйнәләренә түгел, уға ла бармаҡ менән төртөп күрһәтәсәктәр, сөнки Динәнең таныштырғанын бөтәһе лә белә. Ауылға ҡайтырғамы? Әсә-атаһының яраһына тоҙ һалырғамы? Өфөлә, аяғы тартмаһа ла, фатиры бар бит әле уның. Шунда ҡайтырғамы? Үҙен берәй нисек аҫрар әле. Шәп һөнәре бар бит - фәхишә. Резеда әсе көлөмһөрәне. Ни эшләргә белмәй, башын тотоп яңынан карауатына ауҙы.

Миңзифа үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәне был мәлдә. Үҙенән дә бигерәк алданған улын күҙ алдына килтереп ғазапланды әсә. Һайланған һаҙға бата, тиҙәр, үҙ мәлендә кәләш алып ҡал, тип күпме тылҡыны уға Миңзифа, юҡ, тыңламаны. Әсә кеше насарлыҡ теләп әйтәме ни? Күпме бынамын тигән ҡыҙҙар димләп ҡараны. Бынау фәхишәне көткәндер инде. Үҙ башына. Резедаһы ла... Килен булып төшкәс тә ҡайһылай фәрештә булып ҡыланды. Бөтөн күрше-тирәнең һушын алды. Хәҙер күҙен дә астырмай көләрҙәр инде Миңзифанан. Ҡылт итеп иҫенә Динә килене төштө. Ул таныштырҙы бит йәштәрҙе! Шул тиклем мыҫҡыл итмәһә! Иң яҡын әхирәтем, тине бит әле, етмәһә. Үпкә һүҙҙәрен әйтмәйенсә тынысла алмаясаҡ ул.

**(Дауамы бар).**

ИЖАДХАНА

**Май аҙағында "Башҡортостан" киностудияһы "Минең йондоҙом" тигән фильмдың презентацияһын үткәрҙе. Бөгөнгө әңгәмәселәребеҙ - ошо фильмдың ҡуйыусы режиссеры Таңсулпан БУРАҠАЕВА һәм фильмда төп ролде башҡарыусы, "Бүреләр" рок-төркөмө лидеры Илшат АБДУЛЛИН.**

# ЙӘШТӘР ТОҠАНДЫРҒАН ЙОНДОҘ...

## йәштәр күңеленә ҡуҙ һалһын



**▸ Мин фильмды нисек ҡарарға икән, тип йөрөй инем, ул хәҙер интернет селтәренә урынлаштырылған икән. Фильм сығыу менән уны Интернет селтәрендә таратыу дөрөҫ микән?**

**Таңсулпан.** Фильм әҙер булғас та уны телевидениеға бирҙеләр, һәм тамашасыларҙың береһе, яҙҙыртып алып, уны интернетҡа урынлаштырған.

**Илшат.** Фильмды телевизорҙан күрһәткәс, уны интернет селтәренән һаҡлап булмай шул инде. Әлбиттә, тамашасы фильмыбыҙҙы тәүҙә ҡала кинотеатрҙарында, ауыл клубтарында ҡараһа, күпкә һәйбәт булыр ине. Икенсе яҡтан, интернет аша уны бик күп кеше ҡарап өлгөргән, төрлө фекер әйтәләр, бәхәсләшеп китәләр



- был йәштәребеҙ өсөн үҙе бер ваҡиға булды. Хатта сит илдә йәшәгән башҡорттар, фильмды ҡарап, Башҡортостанда тормош гөрләй икән, ҡайтҡыбыҙ килә, тип яҙалар.

**▸ Һоҡландырҙы ла кино, уйландырҙы ла... Бындай фильм төшөрөү фекере нисек тыуҙы?**

**Таңсулпан.** Бөтөн матур уйҙар ғаиләбеҙ бергә йыйылғанда, сәй эскән ваҡытта тыуа. Был юлы ла шулай булды. Әсәйем Мәрйәм Бураҡаеваның кәнәштәре, ағайым Илгизәр, апайым Гөлнурҙың төрлө яҡлы ярҙамы менән апайым Зөһрә (фильмдың сценарий авторы һәм директоры) менән эшкә тотондоҡ.

Йәштәр өсөн фильм төшөрөү уйы күптән бар ине, һәм "Рәхмәт" фильмын төшөргән ваҡытта Илшат менән танышҡас, был фекеребеҙ асығыраҡ тоҫ алды. Баш ҡалабыҙҙа саф башҡорт телендә һөйләшеп, хыялдарын тормошҡа ашырырға тырышып, туған телебеҙҙә йырҙар йырлап йәшәгән башҡорт йәштәре образын тыуҙырырға тырыштыҡ. Хәҙерге заманда йәштәр ҡалала ҡалырға ынтыла, һәм, әлбиттә, ҡала башҡорто ниндәй булырға тейешлеген асыҡлау - заман сәнғәтенең төп бурыстарының береһеләр, тип уйлайым.

**▸ Илшат, һиңә профессиональ актерҙар менән бергә уйнау ҡыйын булманымы?**

**Илшат.** Юҡ, сөнки барыһы ла ярҙам итте, кәңәштәр бирҙе. Минең геройым - ул мин үҙем булған өсөн дә ҡыйын булмағандыр. Ә инде оялмау, үҙеңде асырға тырышыу сәхнә





тәжрибәһенән киләләр. Мин бала-саҡтан уҡ сәхнәләрҙә сығыш яһап үҫтем.

**▸ Таңсулпан, фильмдың ижади төркөмө тик йәштәрҙән генә тора. Тулы метражлы фильм төшөрөү яуаплылығын иңегеҙгә алырға нисек баҙнат иттегеҙ?**

**Таңсулпан.** Был фильмды төшөрә алыуым менән мин "Башҡортостан" киностудияһы директоры Айбулат Ғәлиәән улы Юнысовҡа рәхмәтлемен. Ул эшләргә ынтылып торған йәштәргә аҙ бюджетлы фильмдар төшөрөү мөмкинлеге бирҙе, сөнки, уның фекеренсә, ҙур проекттарға тотонор алдынан йәштәр иң тәүҙә үҙҙәрен аҙ бюджетлы проекттарҙа һынап ҡарарға тейеш. Был, ысынлап та, минең өсөн генә түгел, бөтөн ижади төркөм өсөн бик ҙур һынау булды. Йәштәргә хас дәрт-дарман менән эшкә тотондоҡ. Ҡуйыусы операторыбыҙ - ун һигеҙ йәшлек Тимур Ғәниев, бәләкәй сағынан ҡулына камера тотоп үҫһә лә, бындай яуаплы эшкә тәү тапҡыр тотоноуы. Ҡуйыусы рәссам Руслан Мәғәлимов, костюм буйынса рәссам Анна Попцова, яҡтыртыу буйынса рәссам Роман Ҡаһарманов, администратор Дилә Мөхәмәтйәрова - барыһы ла йәштәр. Актерҙарыбыҙ - Мәскәүҙән яңы ҡайтып төшкән щепкинсылар, сәнғәт академияһын яңы тамамлаған йәш актерҙар. Шау-гөр килеп, ал-ял белмәй төшөрҙөк фильмыбыҙҙы, алдыбыҙға сығып торған ҡыйынлыҡтарҙы дәртебеҙ йырып сығырға ярҙам итте. Ҡулынан килгәнсе матди ярҙам күрһәткән Гүзәл Юныс ҡыҙы Яубаҫароваға, Морат Булат улы Байдәүләтовҡа рәхмәтемде еткергем килә.

**Илшат.** Иҫкә төшөрһәң - нимәләр генә кисермәнек беҙ. Әҫелә бештек, ноябрь айҙарында йәйҙе уйнап, өшөнөк... Ә барыбер күңелдә тик яҡты, матур иҫтәлектәр, сөнки беҙ бер ғаилә кеүек булдыҡ. Әле лә барыбыҙ ҙа дуҫтарбыҙ, бер-беребеҙҙе ярҙам ҡулы һуҙып, берҙәм булып йәшәйбеҙ.

**Таңсулпан.** Әлбиттә, аҙ бюджетлы фильм төшөрөү еңелдән булманы. Финанслау туҡтауы арҡаһында фильмыбыҙ байтаҡ ваҡытҡа тотҡарланып ҡалды. Етмәһә, актерҙарыбыҙҙың ҡайһыныһын армияға алырға тейештәр. Шундай ваҡытта үҙемдең кескәй эш хаҡымды тулыһынса ижади төркөмдө ашатыуға, ҡоролмалар ташыусы машинаға бензин һатып алыуға һалған саҡтар булды. Төнгө съемкаларҙан һуң актерҙарҙы ҡайтарып ебәрергә такси яллайым да, үҙем ярты Өфө аша йәйәүләп ҡайтып китәм. Таң ата, мин таң йондоҙона ҡарап хыялланып барам - ошо тиклем ҡыйынлыҡтар менән төшөрөлгән ижад емешебеҙ халыҡ күңеленә хуш килһен, "Минең йондоҙом" беҙҙең йәштәр өсөн, ысынлап та, юл күрһәтеүсе йондоҙ булһын ине...

**Илшат.** Кинолы мин презентация ваҡытында ғына тулыһынса ҡараным. Экранда мин дә, мин түгел дә... Минең булмышымда йәшәгән хыялый Илшат айырым бер тормош менән йәшәгән кеүек... Кинола төшкән ваҡытта ла, хәҙер инде айырыуса мин үҙемдең маҡсаттарым, ижадым хаҡында уйланам, хыялдарҙы тормошҡа ашырырға, "Бүреләр" рок-төркөмөн яңы кимәлгә күтәрергә, тип янып йәшәйем.

**▸ Мине айырыуса һуғыш сәхнәләре тетрәндерҙе. Был сәхнәләрҙе нисек төшөрҙөгөҙ?**

**Таңсулпан.** Наркотик таратыусы булып уйнаған Руслан Ронич йыйҙы егеттәрҙе. Актерҙарҙан башҡа, бер кем дә театраль һуғышыуҙың ни икәнен белмәй. Һуғыш сәхнәһен ҡуйыусы актер Илсур Ҡаҙаҡбаев менән режиссер ярҙамсыһы Роберт Камалов сәхнә һуғышының алымдарын тиҙ арала аңлатып бирҙе береүен, әммә егеттәр, сәхнә барышында онотолоп китеп, бер-береһенә ныҡ ҡына эләктереп тә алды.

**Илшат.** Егеттәрҙең күҙҙәре күгәреп, биттәре һыҙырылып бөттө, тик бер кем дә үпкә белдермәне. Ҡай саҡ буталып та киткеләнек. Мине бер ваҡыт ергә йыҡтылар ҙа, "үҙебеҙҙекеләр" үк типкеслэй башланылар. Һүҙ әйтергә лә, торорға ла форсат юҡ - башымды ҡапланым да, көтөп ятам.

**▸ Киноны ҡарағандан һуң күңелдә ниндәйҙер яҡтылыҡ ҡала, үҙең, маҡсаттарың, ә иң мөһиме - хыялдарың тураһында уйланаһың. Һеҙ бөгөнгө көндә нимә тураһында хыялланаһығыҙ һәм ошо хыялдарҙы тормошҡа ашырыр өсөн нимәләр эшләйһегеҙ?**

**Илшат.** Хыял хыял булып ҡалмаһын өсөн көн дә уны ғәмәли эштәр менән яҡынайтырға кәрәк. Беҙ, рок-төркөм егеттәре, бик йыш йыйылабыҙ, репетициялар үткәрәбеҙ. Икенсе альбомыбыҙҙы сығарырға уйлайбыҙ, көҙ Өфөлә һәм ҙур ҡалаларҙа, район үҙәктәрендә концерттар менән сығыш яһарға йыйынабыҙ. Тәүге еңеүҙәребеҙ ҙә бар. Беренсенән, башҡорт музыка донъяһында тәүге тапҡыр башҡортса йыр "Бомба-Питер" тигән абруйлы халыҡ-ара проектына эләкте. Был беҙҙең "Бүреләр" рок-төркөмө башҡарыуында Рим Хәсәновтың "Әклимә" йыры. Бомба-Питер - ул айырым альбом. Ошо альбом буйынса артабан фестиваль үткәрелә. Тағы бер уңышыбыҙ - яңы асылған "Курай ТВ" каналы "Минең йондоҙом" фильмынан "Яралы яҙмыш" клибын "Turkich Music Box" халыҡ-ара каналына ебәрҙе. Ул ун туғыҙ илдә күрһәтелә. Һәм ошо клип биш иң шәп йыр хит-парадына эләккән. Хәҙер беҙҙең сайтҡа төрлө илдәрҙән яҙалар.

**Таңсулпан.** Бөгөнгө көндә Санкт-Петербург ҡалаһында икенсе юғары белем алам. Шулай уҡ башҡорт милли костюмы буйынса ғилми хеҙмәт башлап йөрөйөм. Башҡорт этнографияһы менән мин күптән ҡыҙыҡһынам, элгәре бернисә проектта костюм буйынса рәссам булып та эшләгәйнем. Был белемде буласаҡ фильмдарымда ла ҡулланырыма ышанам, документаль-этнографик фильм төшөрөү уйы менән дә янам. Зөһрә апайым менән берлектә һәм үҙем дә яҙған нәфис фильм сценарийҙары үҙ ваҡытын көтөп ята. Әлбиттә, кино - юғары сығымдар талап иткән, әммә шул уҡ ваҡытта иң халыҡсан, халыҡ тормошон төрлө яҡтан асып бирган сәнғәт төрө. Кино сәнғәтенең ошо мөмкинлеген беҙ башҡорт халҡының иҫ китмәле рухи байлығын бар донъяға танытыу маҡсатында файҙаланырға тейешбеҙ.

**Әлиә БАЙРАМҒӘЛИНА әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЭШ УРЫНЫНДА...
## гөлдәр үҫтер

■ Италия ғалимдары дәлилләүенсә, күп кешеләр әңгәмәсеһен уң ҡолағы менән тыңлай икән. Бындай эксперименттың авторҙары фекеренсә, бында баш мейеһе ярымшарҙарының функциональ асимметрияһы сәбәпсе. Тикшеренеүселәр өс төрлө эксперимент үткәреп ҡарай. Тәүгеһе - көслө музыка яңғыраған төнгө клубта үтә. Ундағы халыҡтың 72 проценты тыңлаусыһының уң ҡолағына һөйләгән. Ошо уҡ клубта үткән икенсе тикшеренеүҙә ғалимдар ундағы кешеләрҙең йә уң, йә һул яғына килеп, тәмәке һораған. Өсөнсө экспериментта тикшеренеүселәр бер төркөм кешеләргә шым ғына анлайышһыҙ һүҙ әйткән, был осраҡта күптәр уң ҡолағы менән ишетергә тырышҡан.

■ Балалар өсөн тәғәйенләнгән ҡоро аҙыҡтарҙың составында 2 процентҡа тиклем тоҙ, 55 процент тирәһе шәкәр бар, шуға ла балаларға бындай аҙыҡты йыш ашау тыйыла. Етмәһә, уларҙа тейешле күләмдә калория юҡ. Мәҫәлән, мәктәп уҡыусыһы төшкә тиклем үҙен яҡшы тойоу өсөн иртәнге аш ваҡытында 500 калория алырға тейеш. Ҡоро аҙыҡтар иһә кәрәкле нормананың 29-39 процентын ғына бирә ала. Бынан тыш, бындай аҙыҡтарҙа тәм, төҫ биреүсе матдәләр, эмульгаторҙар күп.

■ Телефон аша ойошторолған оҙайлы әңгәмәләр терһәк нервыһының тартылыуына килтерә. CNN хәбәр итеүенсә, шул сәбәпле ҡул беләктәре һыҙлай башлауы ихтимал. Был "сир"ҙе табиптар "мобиль терһәк" йәки кубиталь туннель синдромы тип йөрөтә. Америка хирург-ортопеды Леон Бенсон әйтеүенсә, һуңғы йылдарҙа бындай сир менән яфаланыусылар арта бара. Кешеләр, ғәҙәттә, ҡулдың ауыртыуына, хатта ойоуына зарлана. Бындай сиргә дусар булыусыларға ҡайһы бер осраҡта хирургик ярҙам кәрәк буласаҡ.

■ Немец ғалимдары дәлилләүенсә, әгәр ҙә муйын ауырта икән, был физик түгел, ә психологик проблема. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, муйындағы ауыртыуҙар хәүеф тойғоһо һәм депрессия менән туранан-тура бәйле. Шуға ла ғалимдар табиптарға сирлегә диагноз ҡуйғанда иғтибарлыраҡ булырға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәрҙә үҙ гүмерендә бер тапҡыр булһа ла муйын ауыртыуына зарланған 448 ауырыу ҡатнаша һәм табиптар уларҙың 20 процентының депрессия, 28 процентының хәүеф тойғоһо менән бәйле булыуын билдәләй.

■ Бөгөн донъяла һәр икенсе оло кеше һәм бала мультивитаминдар ҡабул итә, әммә уларҙың файҙалымы, юҡмы икәнлеге тураһында бер кем дә уйланмай. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бындай витаминдар ир-егеттәрҙең организмына бер нисек тә тәьҫир итмәй. Мультивитаминдарҙы даими ҡулланған ҡатын-ҡыҙҙар һәм бөтөнләй витаминдар ҡабул итмәгәндәр араһында ла бер ниндәй ҙә айырма булмай сыҡҡан. Шуға ла ғалимдар төрлө витаминдар ҡатнашмаларына аҡса түкмәҫкә, ә йәшелсә, емеш-еләк, итте күберәк ашарға тәҡдим итә.

■ Эш урынында гөлдәр үҫтереү хеҙмәткәрҙәрҙең һаулығына ыңғай йоғонто яһай. Тикшеренеүҙәрҙә төрлө компанияларҙың 305 хеҙмәткәре ҡатнашҡан. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, офиста ни тиклем гөлдәр күберәк булһа, шул тиклем ауырып эшкә сыҡмаусылар һаны кәмерәк булған. Бүлмә гөлдәре организмды көсһөҙләндереүсе осоусы органик компоненттарға ла тәьҫир итә ала.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Үҙ эшеңде башлау өсөн һынмаҫ ныҡышмалылыҡ менән… ижади һәләт тә кәрәк. Эйе, нәҡ ижади һәләт, бәлки, төрлө предприятие, хужалыҡтарҙа, завод һәм фабрикаларҙа эшләүселәргә етмәгән ижади һәләт. Сөнки бөгөнгө көн талаптарына тура килгән, һинең үҙеңә лә файҙа килтерерлек, шул уҡ ваҡытта кешеләрҙә лә ҡыҙыҡһындырған, уларҙың мәнфәғәттәрен яҡларлыҡ бизнес-идея уйлап табыу, йә иһә ҡайҙандыр күрепбелеп-ишетеп һәм, һис шикһеҙ, иң кәрәклеһен тотоп ҡала белеү мөһим. Бының өсөн ошоларҙы аңлай һәм ваҡытында һиҙә алырлыҡ һәләт кәрәк.**



# ҠУЛ ҠАУШЫРЫП УЛТЫРЫП,
## уңыш ҡошондо осороп ебәрмә…

Автомобиль бөгөн байлыҡ билдәһе түгел, ә зарурлыҡ. Һәр бер ҡапҡа төбөндә тиерлек берәр, хатта икешәрөсәр машина тора. Өй янында ғына көтөп торған машинаға ултырып сығып китеүҙәр рәхәт шул. Ләкин тормош булғас, төрлө хәлдәр була. Күңеллеһе лә, күңелһеҙе лә. Автомобиль менән бәйле ошондай күңелһеҙ хәл - ул юл-транспорт фажиғәһе. Бындай хәлгә тарыу - үҙе бер бәлә, ә бына страховка компанияларынан ремонт өсөн кәрәк булған страховка аҡсаһын түләтеп алыуҙары... Күпме ваҡыт, күпме нервылар ҡаҡшауы, иҫәпһеҙ-һанһыҙ сират күперҙәрен үтеү, ҡайһы бер милиция хеҙмәткәрҙәренең дорфалығы, тәртипһеҙлеге менән осрашыуҙар - һанай китһәң, бик күп инде уның ауырлыҡтары. Бөтә был процедураларҙың ҡатмарлылығын, ауырлығын бары тик үҙе ошо ваҡиғалар аша үткән кеше генә аңлай торғандыр. Әммә хәлде еңеләйтеп була. Элек юлдарҙа бәләгә тарыусылар тик үҙ көсөнә, ваҡытына һәм дә юл хәрәкәте хеҙмәткәрҙәренең намыҫлылығына һәм профессионаллегенә ышанһа, бөгөнгө көндә улар был эште авария комиссарҙарына ышанып тапшыра ала.

Кем ул авария комиссары? Ниндәй эштәр атҡара? Халыҡҡа ниндәй ярҙамы тейергә мөмкин? Күптән түгел барлыҡҡа килгән был хеҙмәтте беҙҙең республикала әлегә Өфө һәм Белорет ҡалаларында ғына күрһәтәләр. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ Белорет ҡалаһы һәм районының автомобиль йөрөтөүселәренә генә түгел, ә күрше райондарҙа ла таныш егет, "Авто-Медиа" Көньяҡ Урал авария комиссарҙары хеҙмәте етәксеһе Рөстәм Иршат улы Фәйзуллин булыр.

- Бала сағым һәм үҫмер йылдарым атайым янында, ЮХХДИ-ла үтте. Минең бала саҡ хыялым атайым кеүек юлда кешеләрҙең хәүефһеҙлеген һаҡлау булды. Ошо хыялымды тормошҡа ашырыу ниәтендә, мәктәпте тамамлағас, Башҡорт дәүләт университетының Юридик институтына уҡырға индем.

Уҡыуҙы тамамлағас, тыуған ҡалаһына ҡайтып, төрлө юҫыҡта эшләп ала Рөстәм, ләкин юл, автомобиль үҙенә барыбер ҙә ныҡ тарта уны. Интернет селтәрендә Рәсәйҙә авария комиссарҙары тигән яңы хеҙмәттең булдырылыуы хаҡында уҡый һәм ошондай уҡ эш менән шөғөлләнергә ҡарар ҡабул итеп, Мәскәү ҡалаһында ошондай хеҙмәт күрһәтеүселәр менән осраша, уларҙың эштәре менән таныша, үҙенә кәрәкле ныҡыштылар яһай.

Һәр яңы эште башлауы еңелдән түгел. Ә был әлегәсә беҙҙең яҡтарҙа алып барылмаған яңы эш. Ләкин егетмен тигән егет кешегә был ауырлыҡтар нимә инде ул! Етмәһә, һәр саҡ кәңәштәрен бирергә әҙер атаһы, юл һәм автомобилдәр өлкәһендә эшләгән дуҫтары ла бихисап. Тәүәккәлләй.

- Авария комиссарҙары институты Рәсәй хоҡуҡ системаһында сағыштырмаса яңы күренеш. РФ Граждандарлыҡ кодексының 49-сы статьяһына ярашлы, авария комиссарҙары хеҙмәте мотлаҡ рәүештә лицензияланған булырға тейеш түгел, - тип һөйләй Рөстәм Иршат улы. - Авария комиссарҙарының төп эш принцибы - кешеләргә ярҙам итеү. Автомобиль йөрөтөү стажына ҡарамаҫтан, һәр кемдең аварияға эләгеүе мөмкин. Һәм беҙгә юл хәрәкәте ваҡиғаһы булған урынға оператив рәүештә сығыу, шулай уҡ юл хәрәкәте хеҙмәткәрҙәре һәм аварияның икенсе ҡатнашыусыһы

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# МАЛ МАЙЫН КҮП АШАМА,
## үҫемлек майын аша!

**Күптәр матур, нәфис кәүҙә тураһында хыяллана һәм нисек итеп һимереүгә юл ҡуймаҫҡа, тип баш вата. Ябыҡ кәүҙә, әлбиттә, ҡорһағы сығып торған һимеҙҙәргә ҡарағанда яҡшыраҡ. Был хәлдән ҡотолоу юлы - туҡланған ваҡытта үкендергес хаталар ебәрмәүҙә. Был ниндәй хаталар һуң? Түбәндә - шулар хаҡында.**

### Сама белегеҙ

Әгәр ҙә кеше көндәлек менюһында аҙыҡ калорияһын күнекмәләрҙә сығарғанға ҡарағанда күберәк ала икән - ул мотлаҡ һимерәсәк. Хатта уның рационында май күләме нулгә тигеҙ булһа ла. Эш аҙыҡтың башҡа макроэлементтары - углеводтар һәм аҡһымдар - беҙҙең өсөн трагик һәләткә эйә булыуында. Улар тик аҙыҡҡа ихтыяж тыуған ваҡытта ғына эшкәртелә, ә артып ҡалғаны тире аҫтына май булып йыйыла. Углеводтарға килгәндә (кәртүк, бутҡалар, тәмле-татлы, ондан бешерелгән аҙыҡтар), уларҙың нимәгә килтергәнен спорт менән шөғөлләнгән һәр кем яҡшы белә. Ә бына протеин менән улай түгел. Күптәр бер ниндәй шикһеҙ үҙҙәрен ҙур күләмдә протеин менән тулыландыра, сөнки нәҡ шулай итеп мускулдың ҡоро массаһын дөртләндерепбула, тип һанала. Организм 30-40 грамм аҡһымды тиҙ генә һеңдереп бөтә ала. Протеиндың ҡалдыҡтары мотлаҡ май ҡатламы рәүешендә тире аҫтына йыйыласаҡ. Протеинды күберәк ҡулланған һайын, һимеҙлек менән көрәшеүе ауырыраҡ буласаҡ.

Майҙарға әйләнеп ҡайтһаҡ, улар сама белгәндә генә яҡшы. Дөйөм ҡағиҙә шундай: һеҙҙең рациондағы май өлөшө тәүлектәге калория һанының 10-20 процентынан артып китмәҫкә тейеш. Шул осраҡта һеҙ майҙа ла йөҙмәҫһегеҙ, йөрәгегеҙҙең сәләмәтлеген дә һаҡларһығыҙ.

### Майҙың кәрәге лә бар

Майҙың бер нисә төрө генә зарарлы, ә бына башҡа майҙар бик кәрәк. Мәҫәлән, үҫемлек майында алыштырғыһыҙ май кислоталары бар. Организм уларҙы үҙ аллы эшкәртә алмай. Ысынында, нәҡ ошо майҙар - анаболик гормондарға, шулай уҡ тестостеронға "төҙөлөш материалы" булып тора. Өҫтәүенә, уларһыҙ май алмашыныуы боҙола, ә был практикала тренинг һөҙөмтәһендә тире аҫтындағы майҙың "иреүен" тулыһынса туҡтатыуын аңлата. Бына һеҙгә парадокс: майҙы бөтөрөү өсөн... май кәрәк! Иң яҡшы май сығанаҡтары - етен майы һәм омега-3 май кислоталары (улар балыҡта була). Файҙалы майҙар юғары иммунитетты һаҡлауҙа ҙур роль уйнай. Уларҙы диетанан алып ташлап, һеҙ һаулығығыҙға зыян да килтерәһегеҙ! Рационда майҙарҙың сағыштырма ауырлығын 10-15 проценттан түбән төшөрмәгеҙ. Югиһә, әгәр ҙә һеҙ май алмашыныуын кәметһәгеҙ, метаболизмдың дөйөмләштерелгән балансы түбән буласаҡ, тимәк, "масса" зыян күрәсәк һәм май һаҡланасаҡ. Мал майы ҡулланыуҙы ҡыҫҡартығыҙ, ләкин үҫемлек майын мотлаҡ ҡулланығыҙ!

### Ауырлыҡ арттырыу өсөн - углевод

Ысынында, мускулатура протеиндарҙан тора, ә углеводтар көсәргәнешле күнекмәләрҙә көс биреүсе "яғыулыҡ" ҡына. Көн һайын кәүҙәнең килограмм ауырлығына 4-8 гр тирәһе углевод кәрәк. Күп тә, аҙ ҙа түгел. Был мускулатурала юғары тонус тотор өсөн етерлек буласаҡ.

менән аралашыу, документтарҙы дөрөҫ рәсмиләштереү, юл ваҡиғаһына акт төҙөү һәм фотоға төшөрөү кеүек эштәр ҙә башҡарыу кәрәк. Төп бурыс - хәл-ваҡиғаны объектив күҙлектән сығып баһалау. Шуға күрә был эштә эшләгән кешегә юл хәрәкәте ҡағиҙәләренең барлыҡ пункттарын һәм страховка ҡағиҙәләрен дә белеү мотлаҡ. Шул уҡ ваҡытта беҙгә ниндәйҙер кимәлдә психолог та булырға тура килә. Юл ваҡиғаһына тарыған водителгә стресс күп осраҡта ваҡиғаға айыҡ аҡыл менән ҡарарға ҡамасаулай, шул уҡ ваҡытта уға икенсе водителдең һәм юл хәрәкәте хеҙмәткәрҙәренең ҡыҫымы булыуы ла мөмкин. Ошо осраҡта тәүге аңлатманың дөрөҫ яҙылмауы арҡаһында ҡаза күреүсенең ғәйепле булып ҡалыуы ла киң таралған күренеш. Бындай ситуацияның киң таралыуын статистикаға ла ҡарап белеп була. "Аком-авто" сервис компанияһы мәғлүмәттәре буйынса, юл-транспорт ваҡиғаһына тарыусыларҙың 80 проценты юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен дөрөҫ ҡуллана белмәүе арҡаһында страховка түләүен ала алмай. Фажиғә урынында булған ярҙамдан тыш, клиентыбыҙ беҙҙән юридик консультациянан алып судта үҙенең мәнфәғәттәрен яҡлауға тиклемге ярҙамға ла өмөт итә ала.

Бөгөнгө көндә Рөстәм Иршат улы 7 кешегә эш биргән. Авария комиссары хеҙмәтенән тыш, уның ойошмаһы юридик ярҙам, эвакуатор хеҙмәте лә күрһәтә. Шулай уҡ махсуслаштырылған, йәғни аварияға эләккән автомобилдәр туҡталҡаһы ла ойошторолған. Киләсәккә пландары менән бүлешеп, Рөстәм Иршат улы автокомплекс булдырырға теләүе хаҡында әйтте. Был автокомплекс машиналар йүнәтеү һәм йыуыу өсөн ҡулайлаштырылған буласаҡ. Кәрәкле документтар йыйып, уйҙарын тормошҡа ашыра ҡалһа, ҡалала тағы ла 13-15 кеше өсөн эш урыны буласаҡ. Шулай уҡ бөтә республика буйынса ошо хеҙмәтте йәйелдерергә теләүен йәшермәй булдыҡлы егет.

Алдыңа маҡсат ҡуйҙың икән, бер нимәгә ҡарамай, шуға ынтылырға кәрәклеген яҡшы аңлай Рөстәм. Эш барышында үҙең, ғаиләң, йоҡо, ял итеү хаҡында бөтөнләй онотаһың, ти ул. Шул уҡ ваҡытта тормошҡа алһыу быяла аша түгел, ә ысынбарлыҡ күҙлегенән сығып ҡарау мотлаҡ икәнлеген дә онотмай. Эшҡыуар икәнһең, тимәк, һин кем менәндер эшләйһең, сөнки ниндәй генә белемгә, тырышлыҡҡа эйә булма, һин бер үҙең генә ҙур эштәр атҡара алмаясаҡһың. Шуның өсөн эшҡыуарға кәрәк булған тағы ла бер һыҙат: ул командала эшләй белеү һәм һинең ҡул аҫтында эшләүселәргә һәйбәт, уңайлы эш шарттары тыуҙырыу. Етәксе була белеү күпте талап итә. Бер коллектив туплап алыу ғына әҙ, ошо коллективта абруйыңды һаҡлап ҡала белеү өсөн дә күп көс түгергә тура килә.

Тағы шул ҡыҙыҡ: бизнес өлкәһенә ҡағылған китаптар уҡымай Рөстәм Иршат улы, төрлө семинарҙарға йөрөмәй, бизнесҡа ҡағылған журналдар яҙҙырмай. Был турала һүҙ сыҡҡас, Рөстәм шулай тине:

- Әгәр кешенең үҙ асылында, характерында эшҡыуарлыҡ һыҙаттары, эшҡыуарлыҡ орлоҡтары һалынған икән, тимәк, иртәме-һуңмы был орлоҡтар шытып сығасаҡ һәм үҙ емештәрен бирәсәк. Әгәр ҙә инде тап киреһенсә булһа, һин кешегә ниндәйҙер әҙер бизнес алып килеп бирһәң дә, ул бер ниндәй эш килтереп сығара алмаясаҡ. Эшҡыуар - ул лидер. Башҡаса булыуы ла мөмкин түгел. Бәләкәй сағында уҡ баланың эшҡыуарлыҡ "үҫентеләрен" күрергә мөмкин. Күреп кенә ҡалырға түгел, ә үҫтерергә, үҫеү өсөн мөкинлектәр тыуҙырырға кәрәк. Эшҡыуарлыҡ - ул талант, ниндәйҙер кимәлдә күңел торошо ла ул.

- Һәр бер эш тармағы нимәгәлер өйрәтә, һығымталар яһарға булышлыҡ итә, донъяға булған ҡарашыңды үҙгәртергә мөмкин, тормошто аңларға ла ярҙам итә, шулаймы?

- Эшҡыуар булыу мине, тәү сиратта, аҡса һанарға өйрәтте, - тине был һорауға Р. Фәйзуллин. - Шулай уҡ үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап булмай, ҡаланың, районды, республиканың күп структуралары, шул иҫәптән власть структуралары менән бәйләнеш булдырыу һәм үҙ эшеңдең белгесе булыуыңды ла күрһәтеү мотлаҡ. Тағы ла шуны әйтеп үтеү кәрәктер тип уйлайым: был донъяла һәр нәмә ниндәйҙер кимәлдә "боҙло һыуға ырғыу" менән бәйле, ә эшҡыуарлыҡ бигерәк тә. Һин юлыңда осраясаҡ төрлө киҫкен һәм ҡырҡыу ваҡиғаларға ҡаршы торорлоҡ көс тапмайһың икән, бик ауырға тура киләсәк. Шул уҡ ваҡытта бар эштә лә уңыш факторы ла ҙур роль уйнайҙыр, тип уйлайым. Уңышлылыҡ һәр ерҙә лә бар ул, тик уны үҙ ваҡытында тотоп ала белергә генә кәрәк. Ҡул ҡаушырып ултыраһың икән, алдыңа килеп ҡунған уңыш ҡошон да осороп ебәреүең ихтимал.

**Шулай итеп, тырыш һәм уңған, заманса фекерләй белгән егеттәр һәм ҡыҙҙар ҡулында илебеҙ киләсәге. Уйҙарыңды тормошҡа ашыра белеү һәләте лә, алдыңа алған маҡсаттарыңдан ситкә тайпылмай атлай алыу ҙа күп көс һәм энергия талап итә. Юлда буласаҡ кәртәләрҙе йә емереп, йә урап үтер өсөн дә аҡыл, үҙ өҫтөңдә туҡтамай эшләү һәм тирә-яҡ мөхиттән айырылмай йәшәү кәрәк - былар тормошта юғарыға үрләүҙең бер баҫҡысы. Иртәгеһе көндөң һулышын алдан тойоп, ғаиләңә һәм дуҫтарыңа терәк-таяныс булып, эргә-тирәңдәгеләргә зыян ҡылыуҙан һаҡланып, башҡарған эштәрең өсөн һәр саҡ яуап бирә алырлыҡ, үҙ-үҙеңә тәнҡит күҙлегенән сығып ҡарай алған кеше булып ҡалыуы ла еңел түгел, ләкин кәрәк.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

## Мин өс тапҡыр ашайым…

Өс тапҡыр аҙыҡ ҡулланған ваҡытта организмға кәрәкле файҙалы элементтарҙы туплау мөмкин түгел. Был осраҡта фил кеүек күп ашайбыҙ ҙа инде! Беренсенән, бер юлы күп аҙыҡ насар эшкәртелә. Аҙыҡтың ҡайһылыр өлөшөнә ашҡаҙан һуты, үт һыуы, аҙыҡ эшкәртеү ферменттары етә, ә ҡалғанына - юҡ. Һөҙөмтәлә артып ҡалғаны һеҙҙең эсәктәрҙә һөрһөй. Был көслө газ барлыҡҡа килеүгә һәм аҙыҡ ағыуҙары менән ағыуланыуға: һүлпәнлеккә һәм хәлһеҙлеккә килтерәсәк. Икенсенән, әгәр ҙә йыш һәм күп итеп ашайһығыҙ икән, артыҡ майҙар, углеводтар һәм аҡһымдар һеҙҙе мотлаҡ май ҡатламдары менән "бүләкләйәсәк". Иртәнге, төшкө, киске аш - был йәмғиәттә нигеҙләнгән һәм эш көнөнә яраҡлаштырылған тәртип. Сәләмәтлек өсөн һәм туҡлыҡлы матдәләрҙе яҡшы һеңдереү өсөн көнөнә 5-6 тапҡыр әҙ-әҙләп ашау файҙалыраҡ.

## Ябығыр өсөн әҙ ашау кәрәк

"Ас" диеталар ауырлыҡты алып ташларға ваҡытлыса ғына ярҙам итә. Өҫтәүенә, калория алмағанға күрә, һеҙҙең организм һаҡлау режимына күсәсәк. Тик был биологик процестарҙың, шуға ҡушып, майҙарҙың "кәмеүе"нең дә тотҡарланыуына алып бара. Бынан бөтә "ас" диеталарға бер типик нәтижә: тәүҙә ауырлыҡ кәмей, һуңынан был процесс бер урында туҡтап ҡала. Тире аҫтына йыйылған май ҡатламын алып ташлау өсөн хәрәкәт итеү мотлаҡ, бының өсөн иң яҡшыһы - аэробика. Был үҙенән-үҙе матдәләр алмашыныуын яйға һала һәм май "яныуы" процесын тотҡарламай.

## Бөгөн күп ашаһам да, иртәгә асыҡһам ...

Байрам өҫтәле артында бер аҙналыҡ калория йыйыу, әлбиттә, ябығырға теләгән кеше өсөн гонаһ. Ләкин иртәгәһе көнгә асығып, был эште яйға һалырға маташыуҙың мәғәнәһе юҡ. Әҙ калориялы диета (хатта бер көнлөгө лә) мотлаҡ матдәләр алмашыныуын тотҡарлаясаҡ, тимәк, һеҙ үҙегеҙҙе тулы тренингҡа кәрәк булған энергиянан мәхрүм итәһегеҙ. Шуға күрә, әгәр ҙә үҙегеҙгә артыҡ ашарға юл ҡуйғанһығыҙ икән, бының дауамы булмаһын һәм ас та йөрөмәгеҙ. Үҙегеҙҙең ғәҙәти ашау режимына әйләнеп ҡайтығыҙ.

## Кәүҙәңде формала тоторға тырышһаң…

Иртәнсәк матдәләр алмашыныуы тиҙлеге иң юғары кимәлдә була. Көн буйына матдәләр алмашыныуы яйлап кәмей, ә төнгә ҡарай иң түбән кимәлгә етә. Бына ни өсөн кискеһен күп ашарға кәңәш ителмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күптәр нәҡ йоҡлар алдынан күп итеп ашай. Был дөрөҫ түгел! Был юл тик һимереүгә генә килтерә. Аҙыҡ һеңдерелеүҙең түбән һөҙөмтәлелеген иҫәпкә алып, кискеһен әҙ генә ашарға кәрәк. Ә иртәнге ашҡа килгәндә - был иң кәрәкле ашау мәле. Организм иртәнсәк углеводтарҙы (гликоген запасын арттырыу өсөн) һәм протеиндарҙы (мускулдарҙы нығытыу өсөн) яҡшы һеңдерә.

## Һаулыҡ өсөн һуттан да яҡшыһы юҡмы?

Ысынлап та, һуттар бик күп витаминдарға бай. Ҙур стакан менән алма йә сейә һуты эсеп, беҙ үҙебеҙгә 200 тирәһе генә калория алабыҙ. Йәшелсә, емеш-еләкте һеңдереү өсөн ваҡыт күберәк талап ителә, ә һут, киреһенсә, тиҙ һеңдерелә һәм был ҡандағы шәкәр кимәленең ҡапыл күтәрелеүенә килтерә. Бының артынан, ғәҙәттә, инсулин гормонының үҫеүе күҙәтелә. Ул мускулдар ярҙамында шәкәрҙең һеңдерелеүе өсөн яуап бирә, ләкин быға өҫтәп, углеводтарҙы тире аҫтына май рәүешендә "йыясаҡ". Бынан һуттарҙы йыш эсһәң, ваҡыт үтеү менән инсулиндың дөрөҫ булмаған юғары секрецияһы мотлаҡ май йыйылыуға килтерәсәк икәне аңлашыла. Шуға өҫтәп, инсулин аппетитты аса. Был кәрәгенән артыҡ ашауға килтерә. Тренингтан һуң бер тәрилкә дөгө һәм башҡа ярмалар һутҡа яҡшы алмаш буласаҡ. Ә һыуһауҙы ябай һыу менән баҫығыҙ.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Башҡаларға ярҙам итеп, нисек үҙеңә ярҙам итергә?

**Кешегә әйткән һүҙегеҙ ҡабат үҙегеҙгә әйләнеп ҡайтып, елкәгеҙгә "менеп ултырасаҡ". Күрәһең, мең йыл элек, И-Цзин ваҡытында, быны һиҙемләү (интуиция) кимәлендә аңлағандарҙыр, әммә быға бөгөн беҙҙең фәнни аңлатмабыҙ бар.**

Барыһы ла ябай энергия алышыныуға нигеҙләнә. Беҙҙән сыҡҡан бар нәмә кире үҙебеҙгә ҡайта. Әгәр һүҙҙәребеҙ һәм эшебеҙ тик негативтан ғына тора икән, Ҙур тормош беҙгә шуны уҡ кире ҡайтара.

Йәшлек йылдарында Филипп үҙен әллә кем итеп тоя. Шулай булыр ҙа ине, был турала уның үҙенән башҡа берәү ҙә белмәй. Өмөтһөҙлөккә бирелеп, ул барыһына ла үҙенең ни тиклем һәйбәт, ә башҡаларҙың насар булыуын һөйләй башлай. Әммә бынан бер ниндәй яҡшы һөҙөмтә сыҡмай. Филиптың кире образы ныҡлап тамырлана ғына бара. Бер ваҡыт ул атаһының уны күршеһенә маҡтап торғанын ишетә. Шунан һуң күршеһе егетте эшкә ала. Был Филипҡа өмөтһөҙлөктән арынырға, үҙ ҡылығына икенсе күҙлектән ҡарарға ярҙам итә. Ул башҡаларҙы кәмһетмәй, киреһенсә, уларға ярҙамлашып, ҡылығын үҙгәртергә һәм шәхси үҫешенә булышлыҡ итергә ҡарар итә. Ниндәйҙер бер мәлдә ул башҡаларҙың үҙен бик юғары баһалауын аңлай. Хәҙер ул - ихтирамлы ғалим.

Ғаләмдә, бигерәк тә Ер тип аталған беҙҙең донъяла барлыҡ йән эйәләренә тере ҡалыу ғына түгел, ә йәшәүҙең тағы ла юғарыраҡ баҫҡысына күсергә ярҙам итеүсе көс йәшәй. Уны, ғәҙәттә, Аллаһ, тип атайҙар, ә беҙ уны "Ижадсы. Булдырыусы" тип тә атайыҡ. Сөнки Аллаһ һүҙе йыш ҡулланыла һәм уның әһәмиәтен аңламайсараҡ ҡабатларға өйрәнде кеше.

Ижадсы беҙгә йәшәүҙең иң юғары формаһына күсергә ярҙам итә, сөнки ижад итеү тамамланмаған әле, беҙ барыбыҙ ҙа ошо процеста ҡатнашабыҙ. Был үҫеш процесында ҡатнашмаусылар, үҫешмәүселәр, деградацияға бирелеүселәрҙән айырмалы, беҙ ҙә ижадсылар һәм үҙебеҙ йәшәгән тормошто яҡшыраҡ итеүселәр. Ижадсы булһағыҙ, төҙөүсегә түгел, ә емереүсегә ярҙам итер инегеҙме? Икеле.

Һеҙ төҙөүсе булһағыҙ, һис шикһеҙ, үҙегеҙгә ярҙам итә алаһығыҙ. Тимәк, йәшәү энергиягыҙ артыр, сәләмәт булырһығыҙ, һөҙөмтәлерәк эшләрһегеҙ, интуициягыҙ һынатмаҫ, иң ауыр проблемалар ҙа еңел хәл ителер.

Малай велосипедтан ҡолай. Һеҙ уға ҡағынырға, ҡабат ултырырға һәм артабан елергә ярҙам итәһегеҙ. Ҡыҙыҡай, яңы күлдәк кейгәс, оялған. Һеҙ уға, принцесса кеүекһең, тип, маҡтау һүҙе әйтәһегеҙ. Фатирын һеҙгә ҡуртымға биреүсе аҡса алырға килә. Һеҙ уға, ҡайһы бер етешһеҙлектәргә күҙ йомоп, өйҙә ни тиклем яҡшы булыуын белдерәһегеҙ. Кешегә ярҙам итеүҙең төрлө ысулдары бар. Бының өсөн юл аша һуҡыр ҡарсыҡты етәкләп сығарырға тип көтөп тороу кәрәкмәй. Әммә ярҙам йылмайыу һәм ҡулбашҡа шапылдатып һуғыу ғына ла түгел.

Джорджина үҙенең бигүк уңышлы булмаған күршеһенең ҡыҙын уҡытыуға үҙ аҡсаһын түләй. Ул алмашҡа бер нәмә лә һорамай. Әммә изгелек изгелекте тарта, тигән Ғаләм ҡануны үҙ эшен башҡара. Уның профессиональ карьераһы барлыҡ өмөтөн аҡлай. Тимәк, Ғаләм, ҡоролош ҡанундарына ярашлы, аңлы рәүештә ярҙам күрһәтеүҙең хаҡын арттырып ҡайтара. Ул һаран түгел.

**Роберт СТОУН.**



## 26 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Танго с ангелом", 1-я серия. Драма
22.30 "Московская сага". Драма
23.30 "Пророк и бесы"
00.40 "Американская семейка". Комедия
01.00 "Шелк"
03.00 Новости
03.05 "Каприз"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05, 03.55 "Улыбайтесь, Вас снимают! Космические разведчики"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 102-я серия
18.05 "Ефросинья", 111-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Женить Казанову", 1-я и 2-я серии
22.55 "Мой серебряный шар"
23.50 "Вести+"
00.10 "Дорога". Мелодрама
01.45 "Варварины свадьбы". Драма

### НТВ
06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Криминальное видео". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Супруги". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Столица греха". Сериал
21.20 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "МАсквичи"
00.20 "Омут". Криминальная драма
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "Мое место под солнцем"
03.50 "Молодые и злые"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**10.10 "Погода"**
**10.15 "Виктория"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
